БАШҠОРТ ХАЛЫҠ УЙЫНДАРЫ

Ғилем

РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
ӨФӨ ҒИЛМИ ҮҘӘГЕНЕҢ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
ГУМАНИТАР ФӘНДӘР БҮЛЕГЕ

БАШҠОРТ ХАЛЫҠ УЙЫНДАРЫ

«Ғилем»
Өфө – 2006

УДК 398
ББК 82.3 Баш
Б 33

Башҡорт халыҡ уйындары. — Өфө: Ғилем, 2006. — 72 б.

Был китап билдәле фольклорсы Ниғмәт Шоңҡаровтың 1958—1965, 1988 йылдарҙа яҙып алған халыҡ уйындарынан торған ҡулъяҙмаһынан төҙөлдө.

Төҙөүсеһе, баш һүҙ авторы, яуаплы мөхәррире
филология фәндәре кандидаты **Г.Р. Хөсәйенова**

Рецензенттары:
филология фәндәре докторы *Ф.Ғ.Хисамитдинова*
филология фәндәре докторы *И.Ғ.Ғәләүетдинов*

ISBN 5-7501-0612-8

© «Ғилем» нәшриәте, 2006
© Хөсәйенова Г.Р., төҙөүсеһе, 2006

Фольклорсы Нигмәт Диниәхмәт улы
Шоңкаровтың иҫтәлегенә арнала

ТӨҘӨҮСЕНӘН

Рәсәй Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ете тиҫтә йылдан ашыу фольклор бүлеге эшләп килә. Башҡорт фольклористикаһы тарихында материал йыйыу эше айырым урын алып тора.Төрлө быуын фольклорсылары тарафынан тиҫтәләрсә йылдар буйы тупланған халыҡ ижады өлгөләре Ғилми архивта һаҡлана һәм халҡыбыҙҙың үҙенсәлекле рухи байлығын тәшкил итә.

Фондыбыҙҙы байыҡтырыуға күп көс һалған фольклорсыларҙың береһе Нигмәт Шоңҡаровтың (1931—1994) исеме күптәргә таныш. Тынғыһыҙ коллегабыҙ 1965—1988 йылдарҙа ойошторолған бер генә экспедициянан да ситтә ҡалмаған, үҙаллы командировкаларға йөрөгән, халыҡ менән хат алышып, почта аша ла материалдар йыйған.Үҙенең табыштары тураһында мәғлүмәттәр менән ул әленән-әле матбуғат биттәрендә лә сығыш яһай торғайны.

Әлеге йыйынтыҡ Нигмәт Шоңҡаровтың 1958—1965, 1988 йылдарҙа республикабыҙҙың ғына түгел, сит өлкәләрҙең ауылдарында ла үҙе тарафынан яҙып алынған һәм, күрәһең, нәшер итергә әҙерләгән «Башҡорт халыҡ уйындары» исемле ҡулъяҙмаһынан төҙөлдө. Беренсе биттә Институт грифы ҡуйылған, хеҙмәттең исеме күрһәтелгән һәм Өфө 199... йәнә ҡәләм менән яҙылған 52+32 тигән яҙыуҙар бар йәғни 84 берәмек уйын булыуына ишара. Ҡулъяҙманы бүлеккә филология фәндәре докторы, Институттың әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре Розалия Әсфәндиәр ҡыҙы Солтангәрәева тапшырҙы. Был ҡиммәтле ҡомартҡыны уға 2004 йылда беҙҙең Әлшәй районына ойошторолған сираттағы фольклор экспедицияһы ваҡытында Ташлы ауылы мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусылары Урал Ғиниәтулла улы Хәйруллин (1950) менән Гөлсәсәк Тимерғәзим ҡыҙы Хәйруллина (1952) биргән булғандар.

Ҡулъяҙманың тәүге биттәре Н.Д. Шонҡаровтың халыҡ уйындары һәм уның әһәмиәте тураһында инеш мәҡәләһенә арналған, артабан уйын текстары бирелә. Улар ниндәй ҙә булһа принцип буйынса түгел, ирекле бирелгәндәр. Әйтәйек, «Ҡарға бутҡаһы» йәки «Сүрәкәй»уйынының варианттары ҡулъяҙманың башында ла, уртаһында ла урын алған. Әйткәндәй, «Ҡарға бутҡаһы» — ваҡыт-миҙгел йолаларына ҡараған күренеш, әммә халыҡ уны уйын итеп ҡабул иткән һәм «Ниндәй уйындар уйнай инегеҙ?»— тигән һорауға информатор: «Ҡарға бутҡаһы»на сыға инек», — тип яуап биргән. Беҙҙеңсә, Н.Д. Шонҡаровтың уны уйындар рәтенә ҡуйыуында әллә ни хилафлыҡ юҡ, сөнки халыҡ ижады жанрҙарының сиктәрен билдәләү әле булһа бәхәсле булып ҡала. Төркөмләү мәсьәләләрен хәл иткәндә, фольклор төрҙәренә синкретлыҡ хас булыуын да онотторға ярамай. Шул уҡ «Ҡарға бутҡаһы» байрамында йола элементтарынан тыш, йыр ҙа, бейеү ҙә, уйындар ҙа булған. Йә булмаһа, «Милли уйын» йәки «Киске уйын» да уйындан ғына түгел, йыр һәм бейеүҙән дә торған. Ғөмүмән, башҡорт халҡында уйындың мәғәнәһе киң. Уйын тигәндән, уйнала торған ғәҙәти уйындар ғына түгел, ҡайһы бер күңел аса торған күренештәр ҙә күҙ уңында тотола. Мәçәлән, ауылда әле лә берәй театр сәхнә әçәре, йә булмаһа кемдәрҙер концерт алып килһә, халыҡта бер-береһенән: «Уйынға бараһыңмы бөгөн кис?» —тигән һорауҙы ишетергә мөмкин.Тимәк, уйындың актив һәм пассив формалары бар, һәм һуңғы миçалды шартлы рәүештә уйындың пассив формаһына индереп була, сөнки халыҡ унда ҡараусы сифатында ҡатнаша, үҙе уйнамай.

Ҡулъяҙмалағы материалды йөкмәткеһенән сығып, биш төркөмгә бүлеп бирҙек: беренсе бүлектә балалар уйындары үҙҙәре өс төркөмдә, йәғни «Ҡыҙҙар менән малайҙар уйындары», «Малайҙар уйындары», «Ҡыҙҙар уйындары» тәшкил итте; икенсе бүлек йәштәр уйындарынан тора һәм улар ҙа «Ҡыҙҙар менән егеттәр бергә», «Тик егеттәр генә», «Тик ҡыҙҙар ғына» уйнай торғандарға бүленде; өсөнсө бүлек «Ир-егеттәр уйындары» тип аталып, унда төрлө йәштәге ир-егеттәрҙең, малайҙарҙың бергәләп уйнаған уйындары бирелде; дүртенсе бүлектә «Ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар уйындары», ә бишенсе бүлектә «Ололар уйындары», үҙ сиратында, «Бабайҙар уйындары»на һәм «Әбейҙәр уйыны»на бүлеп урынлаштырылды. Һуңғы төркөм бер генә уйынды эсенә алһа ла, беҙ уны айырым бүлек итеп бирәбеҙ, сөнки халыҡта

улар булырға тейеш, тигән фекерҙәбеҙ. Мәҫәлән, «Әбейҙәр сыуағы» байрамы тураһында ҡулъяҙмала мәғлүмәт юҡ. Бәлки ошо хеҙмәт менән танышҡас, уҡыусыларыбыҙ материалдар ебәреп, беҙҙең фаразды раҫларҙар.

Ҡулъяҙмала һигеҙ тиҫтәнән ашыу уйын һүрәтләмәһе урын алған. Уларҙың илле икеһе Ниғмәт Шоңҡаровтың ҡулы менән яҙылған, егерме алтыһы машинкала баҫылған, һәм барыһы ла уның тарафынан төрлө йылдарҙа, төрлө урындарҙа яҙып алынған, ни бары алты уйын ғына «Башҡортостан ҡыҙы» журналынан киҫеп алып йәбештерелгән. Ҡайһы бер уйындарҙың тексталары һүрәт менән тулыландырылған (уйын ҡоралдары, уйынсыларҙы урынлаштырыу схемалары һ.б.). Ғөмүмән, был ҡулъяҙма үтә ҡиммәтле ҡомартҡылар рәтендә тора, сөнки тик халыҡ уйындарын ошо күләмдә бергә туплаған бындай ҡулъяҙма беҙҙә әлегә берәү генә. Был йыйынтыҡта 73 уйын һүрәтләмәһе урын алды, шул иҫәптән 18 берәмек вариант булараҡ инде (уйындың ҡайһы райондарҙа таралған булыуы күренеп торһон өсөн, варианттар бер-бер артлы бирелде), быларҙан тыш, фольклорсы ҡайһы бер уйындарҙың һүрәтләмәһен биреп тормайынса, уларҙы һанап китеү менән генә сикләнгән. Беҙ уларҙы иҫкәрмәләр бүлегендә бирҙек. Шунда уҡ уйындың ҡайҙа, ҡасан, кемдән яҙып алынғанын һәм ҡайһы бер уйындарға ҡарата үҙебеҙҙең фекерҙәрҙе әйттек. Ҡулланылышта һирәгерәк осраған һүҙҙәргә төп өлөштә, йәғни уйындың һүрәтләмәһе урын алған биттә, аңлатмалар бирелде. Беҙҙең йыйынтыҡта уйындың рәт һаны менән бергә йәйә эсендә уның Н.Д. Шоңҡаров ҡулъяҙмаһындағы рәт һаны ла күрһәтелде. Ҡулдан яҙылған текстар күп булыу сәбәпле, улар тураһында билдә ҡуйманыҡ, уларға ҡарағанда һан яғынан күпкә ҡайтыш машинкала баҫылған текстарҙың рәт һаны янына «м» хәрефе ҡуйҙыҡ. Был Н.Д. Шоңҡаровтың ҡулъяҙмаһындағы текстың машинкала баҫылған икәнен күрһәтеп торасаҡ.Әлеге йыйынтыҡта текстар нигеҙҙә ҡулъяҙмалағыса бирелде. Ҡайһы бер текстарға ғына, йөкмәткеһенә зарар килтермәйенсә, бер аҙ төҙәтмәләр индерелде, әммә йәйә эсендә улар күрһәтелде һәм аңлатма бирелде. Н.Д. Шоңҡаров тарафынан яҙылған инеш һүҙ ҙә саҡ ҡына стилистик яҡтан шымартылды.

Ҡулъяҙманы тулы килеш баҫтырыу маҡсатында, «Халыҡ уйындары» бүлегенә бармаған материалдарҙы «Ҡушымта»ла биреүҙе маҡсатҡа ярашлы, тип таптыҡ.

Тиҫтәләрсә йылдар фольклорсы Ниғмәт Шоңҡаровтың тыуған Ташлы ауылы мәктәбендә һаҡланған, әммә бөгөнгө көндә лә әһәмиәтен юғалтмаған ҡулъяҙманан төҙөлгән йыйынтыҡты уҡыусы тейешенсә баһалар, тигән өмөттә ҡалабыҙ.

Йыйынтыҡты уҡығандары, иҫкәрмәләр яһап, файҙалы кәңәштәр биргәндәре өсөн фольклор һәм сәнғәт бүлегенең ғилми хеҙмәткәрҙәренә, айырыуса филология фәндәре докторы Ф.А. Нәҙершинаға, ҡулъяҙманы бүлеккә килтереп тапшырғаны өсөн филология фәндәре докторы Р.Ә. Солтангәрәеваға, рецензенттар филология фәндәре докторҙары Ф.Г. Хисамитдинова менән И.Г. Ғәләүетдиновҡа оло рәхмәтемде белдерәм.

ИНЕШ

Халыҡ уйындарының быуындан-быуынға тапшырылып, хәлегә тиклем һаҡланып ҡалғандарына иғтибар итһәң, улар халыҡтың уҙған тормошон, культураһын, көнкүрешен күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итәләр. Халыҡ уйындарының әһәмиәтенә килгәндә, уларҙың йәш быуынды тәрбиәләүҙә тотҡан урыны баһалап бөткөһөҙ.

Уйындар кешене күп яҡлап үҫтерә, уларҙың фекерләүен, хәтерен, ихтыяр көсөн үҫтерә (арттыра) һәм физик яҡтан нығыта. Уйын барышында һәр кем етеҙҙәрҙән, көслөләрҙән өлгө алыуҙы, үҙе лә беренселеккә ирешеүҙе маҡсат итеп ҡуя һәм төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға тырыша, уңышҡа ирешһә, үҙенең еңеүе менән ләззәтләнә. Күмәк уйындар дуҫлыҡ, берҙәмлек сифаттарын тәрбиәләргә булышлыҡ итә.

Тәүтормош кешеһе һунарҙың уңышлы булыуы, һунар ҡоралдарының камиллашҡан һәм һунарсының алдан үҙен әҙерләүенән торғанын аңлап, һунарға барыр алдынан ҡоралдары менән төрлө ҡатмарлы ауыр урындарҙан үтергә әҙерләнеп, күп яҡлы күнекмәләр башҡарған.

Тора-бара һунарсылар балаларына шул тәртиптә өйрәтә башлағандар. Эш ҡоралдарының ҡатмарлана барыуы, хеҙмәт процесында аҡыл менән эш итә башлау арҡаһында, тәүтормош кешеһенең аҙмы-күпме буш ваҡыты була башлаған. Шулай итеп, ул үҙен алмаштыра торған йәш быуынды тәрбиәләү өсөн мөмкинселек булдырған.

Үҙҙәренә һунарҙа уңыштар теләп, кешеләр, үҙҙәре аулаясаҡ хайуандарҙың тауыштарына, хәрәкәттәренә оҡшатып, ишаралар яһап бейеү уйындары ойоштора башлағандар. Әйтәйек, боронғо башҡорттар бейегән ваҡытында бөркөт ҡоштоң шыҡайып барып ҡаяға ҡуныуын, һунарсының һаҡ ҡына уға яҡынлашыуын күрһәтә. Беҙҙең хәҙерге ҡарамаҡҡа бөгөрһеҙ, ҡырағай күренеш әлбиттә, ләкин боронғо кешеләр айыу, бүре, һеләүһен

балаларын бик бәләкәй ваҡыттарынан алып ҡайтып, ҙур булғанса тәрбиәләп үҫтереп, уйын көнө килеп еткәс, ир балаларға атыш күнегеүҙәре үткәргәндәр. Тимәк, башта хеҙмәт, унан һуң уйында хеҙмәттең сағылышы күренә.

Ер эштәре, малсылыҡ үҫешкән һайын уйындарҙа ла яңы сифаттар, күренештәр (һыҙаттар) барлыҡҡа килә. Элек уйын ваҡыттарында туранан-тура һунар, хеҙмәт ҡоралдары ҡулланылһа, тора-бара уҡ-йәйә, һөңгө, таш урынына таяҡ, шар, туп һәм башҡа шундай нәмәләр ҡуллана башлағандар. Шул рәүешсә хеҙмәт деталдәрен үҙ эсенә алған спорт уйындары тыуған.

Башҡорт халыҡ уйындары ҡатмарлы үҫеш баҫҡыстары үткән. Беҙҙең көндәргә килеп еткән уйындарҙа халыҡтың боронғо ышаныуҙарын, хәрби мөнәсәбәттәрҙе һәм күп төрлө хеҙмәт деталдәрен күреп була. Мәҫәлән, тәүтормош кешеләренең төрлө ышаныуҙары «Ҡарға бутҡаһы», «Убыр әбей», «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Соҡор туп», «Ашыҡ сағыу», «Үгеҙ уйыны», «Һаҡыташ» кеүек уйындарҙа һаҡланған. «Убыр әбей» уйынында әсә ролен башҡарған ҡыҙ «балаларын» өйөп кенә урынлаштырғас, тимер таяғы менән тирәләп, серле һамағын әйтә-әйтә әйләндереп, һыҙыҡ һыҙа. Шунан ашарға эҙләп сығып китер алдынан, шул уҡ серле тимер таяҡ менән «балаларының» һәммәһенең башына тейеп һамаҡлай:

Убыр әбей килмәҫкә,
Тимер ҡапҡан ҡорайым
Ҡорайым, ҡорайым.
Эләкһен дә йығылһын,
Мәрәкәһен күрәйем.
Күрәйем, күрәйем, күрәйем.

Бында беҙ һүҙ көсөн — һүҙҙең еңелмәҫ көс булыуын һәм ошо һүҙҙәрҙән төҙөлгән уйын һамағы ярҙамында Әсәнең кешеләргә яманлыҡ эшләргә әҙерләнгән Убыр көсө менән көрәшеүен күрәбеҙ. Ә бына «Аҡ тирәк, күк тирәк» уйынын уйнаусы малайҙар билгә тиклем сисенеп, йәғни күлмәктәрен һалып уйнау бар. Бабайҙар әйтеүенсә, борон замандарҙа был уйынды уйнаусылар тәндәренә ҡыҙыл балсыҡ менән төрлө һыҙыҡтар, тамғалар төшөрөр булғандар. Шулай уҡ «Үгеҙ уйынын» ҡараһаҡ та, унда еңелгән уйынсыға яза итеп, битенә төрлө һыҙыҡтар, түңәрәктәр төшөрәләр.

Тыуған илде, ғәзиз тупраҡты дошмандарҙан, баҫҡынсыларҙан һаҡлау ир-егеттәр елкәһендә, батыр ирҙәр иңендә булған. Элекке замандарҙа хәрби уйындар, дошман менән ҡапма-ҡаршы килеп алышыуҙар ир-егеттәрҙән ифрат ҙур физик әҙерлекле булыуҙы талап иткән. Шуға күрә лә халыҡ уйындарының күбеһе, ир балаларҙы физик яҡтан үҫтереү маҡсатында, ныҡ уйлап ижад ителгән.

Боронғо кешеләрҙең, әле уҡ-йәйә ҡулланғанға тиклем осорҙарҙа, иң ышаныслы ҡоралы — таш менән тура бәреү һаналған. Тора-бара ҡул көсө менән генә ташты «атып» ебәреү кешеләрҙе ҡәнәғәтләндермәй башлаған. Улар ташты турыраҡ та бик күпкә йыраҡыраҡҡа осороп ебәреү өсөн ҡулайлама уйлап тапҡандар. Уға *һапҡын* тип исем ҡушҡандар. Боронғо замандарҙағы һуғышсылар, һунарсылар ҡулайламаһы хәҙер малайҙар тарафынан «Һапҡын уйыны» тип уйнала (19 бит).

«Һыҙма туп» уйынын алып ҡарайыҡ: күмәк малайҙар яҡ-яҡҡа бүлешеп, күмәкләшеп алышыуында ла боронғо һуғышсыларҙың көрәш-алыш таҫыллығының сағылышы күренеп ҡала.

«Сәпәмә туп» уйынында ла һауанан осоп килгән тупты тотоп алып, йән-фарман ҡасып барған «дошманға» бәреп, уны «үлтереү», уйынсынан ҙур тәжрибә, көсөргәнешле күнегеү талап итә.

Күреүебеҙсә, халыҡ уйындары — халыҡ көнкүрешенең кескәй бер сағылышы, тимәк, халыҡ үҙе ижад иткән төрлө уйындар ярҙамында йәш быуынды тормош көтөргә, матур ғүмер итергә әҙерләй. Ә бының өсөн кеше һәр яҡлап ныҡ, физик яҡтан сыныҡҡан булырға тейеш икәнен дә иҫкәртергә онотмай. Бында килтерелгән 50 уйындан бер нисәһенә генә күҙәтеү үткәрҙек.

Шулай ҙа Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында үҫкән малайҙарҙың бер-ике уйынын хәтергә төшөрөп китке килә. Үҫмер малайҙарҙың эске донъяһын аңлаған, улар тормошона-булмышына иғтибарлы булған атайҙар, ағайҙар һуғышҡа киткәс, ҡарттайҙар ҙа аҙ ҡала. Малайҙар йәй буйынса ололар менән бергә эштә. Уҡыу йылы башланғас — уҡыуҙа. Өҫтә иҫке һырма йә сәкмән, төплө быйманан ел дә, ҡар ҙа үтә, ләкин дәрес ҡалдырыу юҡ. Дәфтәр урынына иҫке китаптар файҙаланыла. Ә дәрестән һуң мал-тыуарҙы ҡарау малайҙар өҫтөндә. Әҙерәк буш ваҡыт ҡалһа... Бала һәр саҡ бала. Уның уйнайһы ла килә бит әле.

Ана шул үтә ауыр йылдарҙа ла бала күңеле ҡыйырһытылмаған, бала күңеле буш ҡалмаған. Ауылдарҙа һирәк-мирәк кенә ҡалған бик

ҡартайған ҡарттайҙар малайҙарға ҙур мәшәҡәт талап итмәгән уйындар өйрәткәндәр, ябай ғына уйындар уйлап сығарып «бүләк иткәндәр». Ул уйындарҙы кемдең ҡарттаһы уйлап тапҡандыр! Эш унда түгел, ләкин ул уйындарҙы бар малайҙар ҙа яратып уйнағандар. Бына «Йөрөткөс» уйынын алайыҡ (№ 36). Уйындың кәрәк-яраҡтары үтә ябай. Иҫке арба тәгәрмәсенән төшөп ҡалған алама ҡоршау һәм 1 метр самаһы тимер сыбыҡ киҫәге. Малай тимер сыбыҡты бөгөп-бөгөп ҡулайлаштырғас, тәгәрмәсте этеп йөрөтә. Һәр тәгәрмәстән үҙенсә моңло зыңлау тауыш килә. Күҙ бәйләнгәс, икенсе урамдан бер малай тәгәрмәсе менән үтеп барһа, унын быңдағы дуҫы тәгәрмәс зыңынан танып, кем үтеп барғанын белеп тора. Күренеүенсә, ябай ғына «Йөрөткөс» уйыны, уйын булараҡ, бала күңелен күтәрһә, икенсе яҡлап иғтибарлылыҡ та,зирәклек тә тәрбиәләгән.

«Таҡта тибеш» уйынында иһә, уйнаусы күпме булһа — шунса сыбыҡ киҫәге һәм ярты метр (өс ҡарыш) самаһы таҡта киҫәге етә. Ҡәләм ҙурлығындағы сыбыҡ киҫәктәрен таҡтаның бер башына «көтөүсе» һалып ҡуя, ә уйында ҡатнашыусы берәү таҡтаның икенсе башына кинәт баҫып, сыбыҡтарҙы ҡаҡлыҡтырып осороп ебәрә...

Ләскәм тиргә батып китеп, бирелеп уйнайҙар ине малайҙар. Ул ғынамы — бәхәстәр ҡуба. Бала бар күңеле менән уйын донъяһына сума, уйындағы проблемаларҙы хәл итә, унын аҡылы донъя мәшәҡәттәрен күпмегәлер онотоп тора. Ә инде «Йәшенмәк» уйынында уйын кәрәк-яраҡтары ла кәрәкмәй, тик уйнарға атлығып торған малайҙар ғына булһын.

Халыҡ уйындарының шундай һәйбәт яғы бар: улар ваҡыт һынауынан ҡурҡмайҙар, оҙаҡ йылдар һуҙымына бер аҙ үҙгәреш кисерһәләр ҙә, һаман да киләсәк быуынға хеҙмәт итеүен дауам итәләр. Шуныһы ла ҡыуаныслы — уйындар тел барьерына ла дусар түгелдәр. Әйтәйек, башҡорт малайҙарының уйындарын рус, сыуаш, мари, мордва, удмурт һәм башҡа милләт халҡы улдары ла кинәнеп уйнайҙар.

Ә инде күп милләтле Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләт халҡының уйындарын йыйып, бер ергә туплап, ғилми яҡтан өйрәнеп, «Халыҡ уйындары» йыйынтыҡтары сығарылһа, йәш үҫмерҙәрҙе, уҡыусыларҙы физик яҡтан тәрбиәләү эшендә уҡытыусыларға, ата-әсәләргә ҙур ярҙам булыр ине.

Н.Д. Шонҡаров

I. Балалар уйындары

Ҡыҙҙар менән малайҙар бергә уйнай торған уйындар

1. *Уҙаманлашыу.* (Уҙаҡлашыу* — *Х.Г.*)

Күмәк уйында уйнаусылар мотлаҡ рәүештә ике тигеҙ төркөмгә бүленеп уйнаған уйындар киң таралған. Ә нисек тигеҙ бүленергә? Уйындарҙа бер тәртип булдырылған, ул «уҙаманлашыу» тип атала.

Уйнаусылар араһынан иң һәләтле, иң ихтирам ителгән ике етеҙ кеше ҡушлашып, уҙаман булып торалар. Парлашып уйынға ҡатнашыусылар килә, килер алдынан шым ғына бер-берեһенә исем ҡушалар (кемгә исем нисек ҡушылыуын уҙамандар белмәй).

— Әссәләмәғәләйкүм, уҙамандар кем?

— Беҙ.

— Һеҙ булһағыҙ һайлағыҙ: ай кәрәкме, ҡояшмы?

— Ҡояш (айы икенсе, һорамаған уҙаманға ҡала).

Шул рәүешсә артабан дауам итә: «Шөшләмә, сөймө?», «Алмамы, хөрмәме?», «Өймө, ҡыуышмы?»

Уҙаманлашып икегә айырылғас, уйынды башлаусылар, йәғни «бәхетле төркөм»дө асыҡлау моменты башлана. Уны асыҡлағанда «бау тотоу», «таяҡ тотоу», «таш сөйөү» тәртиптәре башҡарыла.

Мәҫәлән, «таш сөйөү» тәртибе — таштың бер яғына төкөрөп:

— Май кәрәкме, таш кәрәкме? — тип һорай.

— Май (төкөргән яғы була инде). Туры әйткән уҙамандың командаһы уйынды башлай.

2. *Әйтеш уйыны.*

Ҡара-ҡаршы әйтешеп уйнау:

— Һике аҫтында май ҡайҙа?

**Был осраҡта* уҙаҡлашыу һүҙе отошлораҡ төҫлө. Уйнағанда парпар булып бүленешеү; парлашыу тигәнде аңлата. Ҡара: Башҡ. тел. һүҙлеге, II том, 457-се бит: 2.

— Сыҫкан ашаған.
— Сыҫкан ҡайҙа?
— Һалам аҫтында.
— Һалам ҡайҙа?
— Үгеҙ ашаған.
— Үгеҙ ҡайҙа?
— Һаҙға батҡан.
— Һаҙ ҡайҙа?
— Һайыҫҡан соҡоған.
— Һайыҫҡан ҡайҙа?
— Кәртә башында.
— Кәртә ҡайҙа?
— Утҡа янған.
— Ут ҡайҙа?
— Көл булған.
— Көл ҡайҙа?
Күккә осҡан.

3. *Убыр әбей.*

Был уйында убыр әбей ролен һәм әсә ролен башҡарыусы була, ә ҡалғандары әсәнең балалары. Әсә балаларын теҙеп ултыртып ҡуя, балалар күп булһа, уңайлы булһын өсөн, көйәнтә формаһында теҙә. Уйнаусы балаларҙың һаны 3—4, 10—15 булырға ла мөмкин. Балаларҙы урынлаштырғас, әсә үҙенең серле тимер таяғы менән (15—20 см оҙонлоғондағы таяҡ) уларҙы уратып түңәрәк һыҙыҡ һыҙа. Шунан бер төрлө ритм менән, сиратлап, һәммәһенең башына таяғының осо менән тейеп сыға. Тейгән ваҡытта түбәндәге һамағын әйтә:

Убыр әбей килмәҫкә,
Тимер ҡапҡан ҡорайым,
Ҡорайым, ҡорайым.
Эләкһен дә йығылһын,
Мәрәкәһен күрәйем.
Күрәйем, күрәйем, күрәйем.
Убыр әбей мут әбей,
Ике күҙе ут әбей, ут әбей,
Ут әбей, ут әбей.
Ҡаты елдә елеп үтһен,
Саф һауала шоңҡар типһен,

Шоңҡар типһен, шоңҡар типһен.
Баҫҡан ере тайғаҡ булһын,
Аны үтһә, ерем упһын.
Аңшайғандар аңлы булһын,
Миңрәүҙәр һиҙгер булһын,
Һиҙгер булһын, һиҙгер булһын,
Убыр әбей күҙен ҡаплап,
Ҡасып, боҫоп ҡотолайыҡ.
Убыр әбей килмәҫкә,
Тимер ҡапҡан ҡорайым,
Ҡорайым, ҡорайым, ҡорайым.
Эләкһен дә йығылһын,
Мәрәкәһен күрәйем,
Күрәйем, күрәйем, күрәйем.

Ошоно әйтеп бөткәс, әсә:

— Ярағыҙ, балаҡайҙарым, мин ашарға эҙләп алып ҡайтайым, — тип, китә.

Ә балалар һыҙыҡ эсенән сығып йөрөй башлайҙар, убыр әбей ҡасып-боҫоп торған еренән тегеләрҙе тоторға итһә, тиҙ генә һыҙыҡ эсенә кереп ҡасалар. Убыр әбей һыҙыҡ тышындағы баланы ғына тота ала.

4. *Сыҙма туп.*

Бик боронғо уйындарҙың береһе булып «Сыҙма туп» уйыны һанала. Уйын элек(ке — *Х.Г.*) замандарҙа сепрәк, йөн туп ярҙамында башҡарылған (тупты эшләгән саҡта, туры булһын өсөн, уртаһына бәрәңге йәки кескәй генә таш ҡуйып эшләр булғандар).

Уйнаусылар уҙаманлашып ике төркөмгә бүленеп алалар. Һәр ике төркөм менән уҙаман етәкселек итә. Һәр төркөмдөң уҙаманы уйнаусылар һанына ҡарап бәләкәй генә тәтәйташ ала ла, шул таштың береһен билдәләй (ул «ҡаҙыҡ» була). Әйтәйек, бүрек эсенән 1-се команда уйынсылары бер таш тартып сығара. Кем «ҡаҙыҡ» тип билдәләгән ташты сығарһа, шул «ҡаҙыҡ» була. Беренсе төркөмдөң уйын етәксеһе «уҙаман» һәм «ҡаҙыҡ» булды. 2-се команда, йәғни икенсе төркөм, шулай уҡ итеп үҙҙәренә «ҡаҙыҡ» һайлайҙар. Шунан ғына уйын майҙаны эшләйҙәр.

Уйында ҡатнашыусылар, әйтәйек, ун кеше булды, ти. 1-се команда ун кеше эсендә йөрөрлөк сыҙыҡ һыҙалар. Уҙаман тупты йәшереп кенә бер уйынсыһына бирә. Ул тупты кемгә биргәнен

2-се команда составында уйнаусылар күрергә тейеш түгел. Шартлы рәүештә 1-се команданы А-лар тип алайыҡ, икенсе команданы Б-лар тип алайыҡ. Б-лар шулай уҡ йоморо-түңәрәк итеп сыҙыҡ һыҙалар. Ҡаҙыҡты тирәләп-уратып, үҙҙәренең сыҙығы эсендә йүгерешеп йөрөй башлайҙар. Ә А-лар Б-ларҙың түңәрәк сыҙығы тирәләй йүгерешеп йөрөй башлайҙар. Б-лар А-ларҙың кемендә туп икәнде белмәйҙәр бит инде, бына ошо уйынды бик көсөргәнешләндерә — һәр уйнаусы һаҡ йөрөй, ә ҡаҙыҡ иң уртала. Ҡаҙыҡты туп тейеүҙән һаҡлап уратып йөрөйҙәр. Уҙаман үҙ командаһындағы уйнаусылар менән етәкселек итә, ләкин уртаға, ҡаҙыҡ ҡырына ҡасмай. А-лар, йәғни тыштағылар, йүгереп йөрөп-йөрөп, Б-ларҙың береһенә бәреп тейгеҙеп, бөтәһе лә төрлө яҡҡа таралып, ҡасып бөтәләр. Шул ваҡыт, йә туп тейгән уйнаусы, йә башҡаһы (кем тупты башта эләктерә — шул), ҡасыусыларҙың береһенә тейгеҙергә тырышып, бәреп ебәрә. Әгәр туп тейһә — ҡасып барыусы «үлә», теймәһә — эстәге туп тейгән уйнаусы «үлә», тимәк, иптәшен ҡайтара алманы. «Үлгән» уйынсы сыҙыҡ эсенән сығып ситтә ултыра. Уйын барышында Б-лар тырышып уйнап, А-ларҙың кешеләрен кәметергә тырышалар, сөнки төп уйындан һуң «ҡаҙыҡлау» ваҡытында А-ларҙың аҙ һанда ҡалыуҙары улар өсөн уңайлыраҡ.

Шулай итеп, уйын бик ҡыҙыу дауам итә, Б-лар командаһында ҡаҙыҡ менән уҙаман ҡалғанға тиклем, киреһенсә лә килеп сығыуы мөмкин. А-лар командаһында ҡаҙыҡ менән уҙаман ҡалырға ла мөмкин. Ошондай кимәлгә бер яҡ килеп еткәс, төп уйын тамамланып, йомғаҡ-һөҙөмтә уйын башлана. Был инде «ҡаҙыҡлау» тип атала: түбәндәге һүрәттәгесә сыҙыҡ ситенә уҙаман менән ҡаҙыҡ баҫа:



ҡаҙыҡ
уҙаман

А-ларҙың ҡалғаны Б-ларҙы ҡаҙыҡлай (туплай, тип әйтеү ҙә бар), туп менән бәрә (10 аҙым самаһы аранан). Ҡаҙыҡ менән уҙаман ялтанып-ялтанып тейҙермәҫкә тырыша. Әгәр тейһә, тупты алып бәреп, кире ҡайтарырға тырыша. Тейҙерә алмаһа, «үлә». Ҡаҙыҡлау

вакытында Б-лар А-ларҙы «үлтереп» бөтә алһалар, сыҙыҡ тышында ҡалып, уйын артабан дауам итә. Киреһенсә лә булыуы мөмкин. Б-лар үҙҙәре «ҡыйралып» бөтөүе лә мөмкин. Был уйында шуныһы характерлы, һәр уйнаусы үҙе өсөн генә тырышмай, шулай уҡ теге йәки был яҡтың отошо ла ошо ойошҡанлыҡҡа ҡарап килә.

4.1. *Сыҙма туп.*

Уҙаҡлашып ике төркөмгә бүленәләр. Ике уҙаман тотамлашып, кемгә сыҙыҡ эсендә, кемгә сыҙыҡ тышында ҡалыусыларҙы билдәләй.

Бер түңәрәк сыҙыҡ һыҙыла. Тыштағылар йәшерелгән туп менән эстәгеләргә бәреп тейгеҙергә тырышалар. Эстәгеләр туптың кемдә икәнен белмәйҙәр. Әгәр тейһә, эстәгеләр ҡайтарырға тырышалар, йәғни ҡасып барыусы тыштағыларға бәрәләр. Тейһә, уйын алышына.

4.2. *Һыҙма туп.*

Уҙаҡлашып ике төркөмгә бүленәләр. Ике яҡтың да башлыҡтары булды. Ике башлыҡ ҡушлап торалар. Уйында ҡатнашыусылар парлашып киләләр: Москвичмы, Победамы? Һ.б., һ.б. Ике төркөмгә бүленеп алғас, сүп ырғытып, уйындың кемдә булыуын беләләр. Уйындың теләгән урыны түңәрәктең тышында була. Шулай итеп, уйын булғандар түңәрәк тышында, икенселәре — эсендә урынлашалар.

Тыштағылар тупты йәшереп бәрәләр, әгәр туп тейгән кеше кире алып ҡайтармаһа, ул «үлә», әгәр ҡайтарһалар — кемгә тейһә, шул «үлә». Команда һәр яҡта кәмей. Кемдеке алда бөтә, шул еңелгән була. Тыштағылар көслөрәк команда булһа, эстәгеләрҙе сығармайса арытып бөтәләр.

4.3. *Сыҙыҡ туп.*

Уҙаҡлашып ике группаға (төркөмгә — *Х.Г.*) бүленәләр. Һәләтле уҙаҡтар ҡушлап баҫып торалар. Былар алдына парлашып (икешәрләп — *Х.Г.*) киләләр:

— Һандуғасмы, ҡарлуғасмы?

— Һандуғас.

Ҡарлугас икенсеһенә ҡала. Тотамнашалар. Ҡайһы атаман-уҙаман осҡа сыҡһа, шуның командаһы эскә керә.

Б-лар, тыштағылар, тупты йәшереп йөрөтөп, А-ларҙың береһенә тейгеҙергә тырышалар, әгәр кемгә булһа ла туп тейһә — ул уйындан сыға. Шулай итеп, Б-лар А-ларҙы бөтөнләй сығарып бөтөргә мөмкин, ләкин эстәгеләр тупты тейгәс тә, А-лар ҡасып бөтмәҫ борон бәреп тейгеҙһәләр, иптәшен ҡотҡарған булып һанала. Ә инде Б-ларҙан кем дә булһа бәргәндә тейгеҙә алмаһа, Б-лар

бөтәһе лә эскә керергә тейеш. Уҙаман-командирҙың ҡайһыһы күп еңелһә, *мәрек*[*] була.

4.4. *Сыҙма туп*

Һәр кешенең билгеләнгән соҡоро була. Кемдең соҡорона төшһә, шул алып бәрә.

5. *Сәпәмә туп.*

Уйнаусылар уҙаманлашып ике төркөмгә бүленәләр. Таш сөйөп кемдәр «уйнаусы», кемдәр «көтөүсе» икәнен беләләр.

Миҫал өсөн, ошо уйында 7 кеше уйнай, тип алайыҡ. Уйнаусылар бер һыҙыҡ буйынса урынлашып алалар, ә көтөүселәр ике һыҙыҡ араһында таралышып баҫалар. Уйын тубы сепрәктән тегелгән, йөндән йоморлап эшләнгән булырға мөмкин (хәҙер инде магазин тубы файҙаланыла). Көтөүселәрҙең уҙаманы (атаманы) уйнаусыларға туп күтәреп биреп тора. Һәр уйнаусы 1 м самаһы таяҡ менән күтәргән тупты ҡаршы яҡҡа — йыраҡҡа осороп ебәрергә тырыша. Әйтәйек, 1-се һуғыусы һуҡты тупҡа, ҡыя тейеп туп яҡынға барып төштө. Был саҡта ул ҡаршы яҡҡа барып, әйләнеп ҡайта алмай бит инде. Был осраҡта 1-се һуғыусы башҡа иптәштәренең һуғыуын көтөп тора. 2-се һуғыусы яҙа һуҡты, ти. Ҡаршы яҡҡа йүгереп китеп булмай, шунда уҡ тупты алып бәреп тейгеҙәләр. 2-се һуғыусы ла көтөргә баҫа. Хәҙер өсөнсө иптәшенең яҡшы итеп тупты осора һуҡҡанын көтә башлайҙар. Көтөүселәр өсөнсө уйынсы һуҡҡанды көтәләр, осоп килгән тупты һауанан уҡ тотоп алыуҙары бар. Ҡаршы яҡҡа йүгереп китеү һаман да ҡурҡыныс бит: туп тейһә, уйнаусы команда көтөүсе командаға әйләнә. Әйтәйек, дүртенсе һуғыусы тупты һәйбәт һуғып, бик йыраҡҡа осороп ебәрҙе, ти. Был осраҡта уйнаусылар ҡаршы яҡҡа барып етеп, кире үҙҙәренең һыҙығына әйләнеп ҡайтырға мөмкин. Уҙаман өс мәртәбә һуға ала. Бөтәһе лә һуғып та, тупты йыраҡ осора алмаған осраҡтар була (быңдай осраҡтар һирәк була булыуын). Был саҡта берәү ҙә ҡаршы яҡҡа барып килә алманы бит инде, шулай булғас, һуғырға хаҡы бөттө уның. Был уйында бер кешенең хатаһын бөтә команда күтәрә.

5.1. *Туп ҡағыш.*

Дим буйындағы «Сәпәмә» туп кеүек. Йөгөрөп (йүгереп — *Х.Г.*) барып килә торған сик «синет» тип атала.

---

[*] Мәрек — аңлатмалы һүҙлектә юҡ. Мәғәнәһе буйынса йүнһеҙ һүҙенә тап килгән һымаҡ.

6. *Мөйөш.*

Аралары унар аҙым булған алты мөйөш төҙөйҙәр. Уйнаусылар күп булһа, мөйөш һандарын арттырырға ла мөмкин. Мәҫәлән, һигеҙ мөйөшкә һигеҙ кеше баҫа, Сабирға мөйөш етмәне икән, ти. Ул: «Һигеҙ мөйөш, һигеҙ мөйөш, ҡайҙа миңә бер мөйөш?» — тип, һамаҡлап йөрөргә тейеш. Шул саҡ мөйөштәрҙәге кешеләр бик тиҙ алмашына. Сабир бер мөйөштө үҙенә алыу өсөн тырыша. Мөйөшһөҙ ҡалған кеше уйынды ҡабаттан башлай.

7. *Боҙоҡ телефон.*

Малайҙар һәм ҡыҙҙар теҙелешеп ултыралар. Уйынсыларҙың береһе «башлыҡ» була. Уйынды тәртипле рәүештә ул алып бара. Ниндәй ҙә булһа һүҙҙәр һайлап ала. Шул һүҙен 1-се ултырған уйынсының ҡолағына ишетелер-ишетелмәҫ әйтә. Ә ул уйынсы шул уҡ һүҙҙе шым ғына итеп эргәһендә ултырған иптәшенә әйтә. Был һүҙ шулай рәтсә, иң һуңғы уйынсыға тиклем бара. Мәҫәлән, башлыҡ: «Елкән», тип әйткән икән ти. Һәм иң һуңғы уйынсынан был һүҙҙең ни нәмә менән бөтөүен белергә тейеш. Ул «Еләк», тине, ти. Күрәһең, уйын барышында кемдер һүҙҙе бутаған. Иң һуңғы уйынсынан ни тип әйткәнен һорай, шул рәүешле үҙе әйткән елкән һүҙе килеп сыҡҡансы һорашып килә. Әйтәйек, теҙелгән рәттә иң һуңғы кеше «еләк» тине, эргәһендәге — «иләк» йәки «беләк» ти. Тимәк, кемдер һүҙҙе боҙған, ишетеп еткермәгән, кемдер «боҙоҡ телефон». Артабан эҙләй һәм былна берәү «елкән» тине. «Дөрөҫ», — ти башлыҡ. — Мин иң беренсе ултырыусыға «елкән» тип әйткәйнем, ә һинең күршең яңылыш ишеткән. Ул — «боҙоҡ телефон». «Боҙоҡ телефонға» яза бирелә, берәй әйберен («фантик») ала. Уйын ошо рәүешле әйберҙәр күбәйгәнсе бара. Һуңынан әйберҙәрҙе «һатыу» башлана. Бер уйынсының күҙен яулыҡ менән бәйләйҙәр. «Башлыҡ» берәй әйберҙе ала ла: «Был фантикка ниндәй наказ йәки ни эшләргә?» — ти. Күҙе бәйләнгән уйынсы — «судья»: «Бейергә, шиғыр һөйләргә һ.б.», — тип әйтә. Әйберҙең хужаһы алға сығып баҫа һәм һорауҙы үтәргә тейеш була. Шул саҡта ғына әйберен кире ала. Әйберҙәр бөткәнсе, уйын ошо тәртип менән бара. Уйнап бөткәс, уйынды яңынан башларға була. Уйын күңелле бара.

8. *Еңеү.*

Был уйынды балалар, ғәҙәттә, яҙ көндәре сиҙәм ерҙә уйнарға яраталар. Уйнаусылар ике төркөмгә бүленә. Ҡапма-ҡаршы торалар. Һәр төркөм үҙҙәренең яғында тура һыҙыҡ һыҙа һәм һыҙыҡ

тышына сығып баҫа. Уйнаусыларҙың аралары 10-30 аҙым булырға мөмкин. Уйындың тәртибе ошолай: 1-се төркөм үҙ-ара йыйылышып, шым ғына һөйләшеп, 2-се төркөмдәгенән кемде лә булһа тоторға тейеш. Һөйләшеп килешкәс, баҫтыра-ҡыуа башлайҙар. Ә был ваҡытта 2-се төркөмдәр кемде тоторҙарын белмәйҙәр. Улар, 1-се төркөмдәргә тотолмау өсөн, ҡаршы яҡтағы һыҙыҡты аша сығырға тейештәр. Уйын һәр ваҡыт ҡапма-ҡаршы бара. Әгәр 1-се төркөмдәге уйынсылар һөйләшелгән уйынсыны (ҡаршы яҡтағы) тотһалар, ул уйынсы 1-се төркөмдә ҡала. Бер ыңғай 2 кешене тотһалар, был уйын дөрөҫ булмай, йәки уйын «янды», тиҙәр һәм уйынды яңынан башлайҙар. Тотһалар ҙа, тотмаһалар ҙа был юлы уйынды 2-се төркөмдәр башлай. 1-се төркөмдәр икенсе һыҙыҡ яғына сығалар. Йәки уйнаусылар урындарын һәр ваҡыт алмаштырып, уйнап торалар. Уйын һәр ваҡыт ошо тәртип менән бара, һәм бер яҡ команданың еңеүе менән тамамланырға тейеш. Йәки, бик оҙаҡ уйнағанда, ҡайһы командала кеше күп — шулар «еңеүсе» тип атала.

9. *Ҡалды.*

Уйында теләгәнсә кеше ҡатнаша ала. Уйнаусылар күп булғанда, уйын тағы ла күңеллерәк була.

Был уйынды бергә-бер генә уйнап була. Уйынсының етеҙерәге иптәшенә «ҡалты» тип һуғып йүгерә. Был ваҡытта ҡалған уйынсы, йәһәт кенә иптәшен ҡыуып етеп, яуап рәүешендә һуға. Ул да «ҡалты» тип әйтеп йүгерә. Уйын ошо тәртип менән алмаш бара. Алдан йүгергән уйынсы арығанда, йәки юрый ғына «әтәл» тип әйтһә, уйын ваҡытлыса туҡтап тора. Ял иткәндән һуң, тағы ла ул «ҡалты» тип әйтеп йүгерә. Иптәше ҡабаттан артынан йүгерә.

10. *Йәшенмәк-затыликом.*

Был уйынды «гөрөлдәк» тип тә әйтәләр. Уйнаусылар шыбаға тотоп гөрөлдәүсене—көтөүсене билдәләйҙәр. Таяҡтың осона сыҡҡан уйынсы гөрөлдәүсе була. Әйтәйек, ун бер кеше уйнай. Гөрөлдәүсе берәй стенаға ҡарап тороп, «гөр-гөр» тип, нисә уйнаусы булһа, шунса гөрөлдәй. Ошо ваҡыттан файҙаланып, уйнаусылар йәшенеп бөтөргә тырышалар. Унды һанап бөткәндә, берәйһе буталып йәшенеп өлгөрмәһә, гөрөлдәүсе:

— Марат стук! — тип ҡысҡыра. Шул саҡ Марат уйындың гөрөлдәүсеһе була, ә инде Марат гөрөлдәгән урынға яҡын булып, ҡулы менән шул урынға тотоноп өлгөрһә — ҡотола, йәғни уйындан сыҡмай.

10.1. *Көрөлдәк.*

Бер кеше көрөлдәй ҡалғандары ҡасып бөтә.

Шунан: «Бештеме?» — тип һорай. «Беште», — тиҙәр. Көрөлдәк эҙләй башлай. Кемде тота, йә башлап күрә — шул кеше үҙе көрөлдәй башлай.

10.2. *Йәшенмеш.*

Йә булмаһа көргөлдәк уйыны уйнала ине, берәү көргөлдәй (ҡарамай тора), башҡалары ҡасып бөтә. Шунан эҙләй башлай, кемде тапһа — шул көргөлдәргә мәжбүр була.

11.а. *Тау шыуыу.*

Бәләкәй сана менән тауҙан һырғалай инек.

11.б. *Ырғымыш.*

Берәм-берәм ырғып китеп ултыра, шул ырғымыш уйыны булды.

Малайҙар уйындары

12. *Ҡарсыға.*

Урамда арҡылыға өс һыҙыҡ һыҙалар. Бер яҡҡа 10 малай, икенсе яҡҡа 10 малай теҙелеп баҫалар, берәүҙәре — ҡарсыға, икенселәре өйрәк була. Урталағы һыҙыҡ аша үткәндә, ҡарсығалар өйрәктәрҙе эләктерергә тырышалар. Тотолған кеше уйындан сыға. Ҡарсыға тота алмаһа, үҙе сыға. Ҡайһы яҡ әҙерәк ҡала, шул еңелә.

13. *Һапҡын* уйыны.*

Ҡайыштан үреп эшләйҙәр һапҡынды, ҡайыш булмаһа — ептән, йүкәнән дә үрәләр.

Уң яҡты уң ҡулға кейә уйнаусы, сатҡа таш һала, һул яҡты усында тота. Бик ныҡ әйләндереп-әйләндереп, ташты сәпкә ебәрә. Борон туры бәрешеп, ярыштар булған.

14. *Туплы уйыны.*

Оҙонса итеп тупраҡ өйөп ҡуялар, тупраҡ өҫтөнә теҙеп күкәй һалалар. Таяҡ тотоп (тотамлашып) һуғыусылар тәртибен билдәләйҙәр. Кем осҡа сыҡһа — шул башлап тәгәрәтә. Әйтәйек, беренсе кеше туп тәгәрәтә, нисә күкәйҙе тубы менән тигеҙеп тәгәрәтеп төшөрһә — шунса күкәй үҙенә була.

15. *Туп һуғыу.*

Уйнаусылар уҙаҡлашып ике төркөмгә бүленеп алғас, туры ғына урамда бер-береһенә ҡапма-ҡаршы баҫып алалар. Аралары

**Һапҡын* ташты атып бәрә торған уртаһы тоҡанлы оҙон бау. Ҡара: Башҡорт теленең һүҙлеге. II том, 574-се бит.

50–60 м самаһы. Атамандар таш сөйөп уйындың кемдәр яғында булыуын билдәләгәс, уйын башлаусылар тупты сәкән менән ҡапма-ҡаршы яҡҡа һуғып ебәрәләр. «Дошмандар» тупты кире ҡайтара алмай яҙа һуғып, туп үтеп китһә, һуғыусылар улар артынан күсеп киләләр, әгәр туҡтата алһалар – кире һуғып ебәрәләр. Шулай итеп, билгеләнгән урынға ҡыуып ебәреп, еңгәнсе, уйын дауам итә. (Билгеләнгән урын, мәҫәлән, бер күперҙән икенсе күпергә тиклем, йәғни бер күрһәтелеп ҡуйылған ҡапҡа турыһы булырға мөмкин).

15.1. *Туп уйыны.*

Уҙаҡлашып икегә бүленәләр. Уйын ҡоралдары: ағастан яһалған туп (башҡа яҡта «шар» тип йөрөтәләр), сәкән (Дим башҡорттарында «ҡаҡма» тип йөрөтөлә). 200–300 м алыҫлыҡтағы ерҙең баш-башын билге ҡуйып, шуның ҡап уртаһынан уйынды башлап ебәрәләр. Ике группаны (төркөмдө – *Х.Г.*) А һәм Б командалары тип алайыҡ.

А-лар ҙа, Б-лар ҙа бер-береһенә ҡаршы буй-буй теҙелеп баҫалар. Иң баштағы кеше тотамлашып, кемгә һуғырға билдәле булғас, тупты ҡағып ебәрә, ҡаршы команда тупты туҡтатырға тырыша. Туп бик ҡыҙыу килеп, туҡтата алмаһалар, һуҡҡан яҡ туп артынан китә, ә тегеләре кире сигенә. Шулай бер-береһен ҡыуып, ҡуйылған сиккә етеп, ҡыҫырыҡларға тырышалар. Алып барып еткерһә, шул команда еңгән була.

16. *Ҡусәй* һуғыу.*

Шыбаға тотоп уйнаусылар тәртибен беләләр. Остағы беренсе һуға. Икенсе – икенсе, өсөнсө – өсөнсө һ.б. Иң аҙаҡта ҡалған «көтөүсе» була.



**Ҡусәкәй* (күсәй түгел – *Х.Г.*) уйыны сүрәкәй уйынының икенсе төрлө исеме итеп бирелә. Ҡара: Башҡорт теленең һүҙлеге ике томда, I том, 584-се бит.

Һәр уйнаусы С таяғы менән Б таяғына һуғып «иксәй», йәғни һикертеп, нисә тапҡыр тигеҙһә, шунса һуға ала. Б таяғының бәләкәй генә эләккесе була. Әйтәйек, беренсе кеше һуғып ебәрҙе, көтөүсе А һыҙығынан ызлап китеп, осоп киткән Б таяғын сатлы А таяғына элеп ҡуйырға тейеш. Бар уйнаған уйнаусыныҡын да ызлап килтереп торһа, көтөүсе еңә һәм уйнаусылар рәтенә баҫа. Әгәр килтергәндә ызлау туҡталһа, һуҡмай ҡалған һәр уйнаусы күпме һуғырға тейеш булһа, шунса көтөүсенең башына сиртә.

16.1. *Күсә һуғыу.*

Уҙаҡлашалар. Таш сөйөп, уйнаусыларҙы белгәс, уйынсылар һәр береһе Б таяғына С таяғы менән һуғып иксәп, нисә мәртәбә һуға аласағын белгәс, уйын башлана. Көтөүсе командалағылар берәмләп А-лағы әбей таяғына ызлап килтереп һуғырға тейеш булалар. Икенсе сиратта икенсе командала уйнаусылар һуға.

16.2. *Сөрәкә.* Оҙаҡлашалар. Көс ике төркөмгә бүленә. Бер урынға башын ҡыйый (ҡыйып) һәм ҡыя ит(еп) таяҡ сәселә лә (ҡағып ҡуйыла) уның ҡыяһына киртелгән сөрәкә һалына. Ҡыя таяҡ буйына ҡарап һалынып ятҡан, тигеҙ итеп ҡырҡылған осона елде генә таяҡ менән осорғансы һуғып, күккә осорола, көтөүсе малайҙар ул сөрәкәне ҡулдарындағы ботаҡлы ағаслары менән сөрәкәгә тигеҙергә тырышалар. Сөрәкә тейеп ҡала икән, көтөүселәр сыға, сөрәкәгә тигеҙеүселәр, серкене тигеҙгән малай — ә-ә, серкеттем бит, тип ҡысҡыра. Талашты булһа — серкемәне, яҙа тейҙе, йәки — тигеҙҙең, тип талашыналар. Сөрәкәгә һәр бер тейгән мәрәй һанала.

16.3. *Себен.*

Дим буйындағы сүрәкә уйынына тура килә. Тик бында биш һыҙыҡ була, тигеҙә алмаһа, күсә-күсә яҡындан һуға.

17. *Мөглөй**.

Уйнаусылар һаны күпме булһа ла ярай. Һәр яғы берәр метр шаҡмаҡ һыҙыҡ һыҙалар. 1 м самаһы һуғыу таяғы була, 20 см мөглөй

**Мөгөлөй* (һүҙлектә шулай бирелгән) уйынының тулы йөкмәткеһе. Тик был осраҡта уйынсылар ике төркөмгә бүленеп уйнайҙар, бер төркөм уйнағансы, икенсеһе көтөп ултыра. Ҡара: Башҡорт теленең һүҙлеге ике томда, I том. А-М. Мәскәү: «Русский язык», 1993, 822-се бит.

таяғы була. Таяҡ ярҙамында шыбаға тоталар. Башҡа сыҡҡан уйынсы беренсе булып һуға, икенсеһе икенсе булып һ.б., һ.б. Иң аҙаҡҡа ҡалған «көтөүсе» була. Осоп киткән мөғлөй таяғын кире урынына һыҙыҡ уртаһына килтереп ҡуя. Уйын башланыр алдынан нисәгә тиклем уйнаясаҡтарын килешәләр. Әйтәйек, 30-ға тиклем. Бер һуғыу өскә хисапланып, һәр уйнаусы унар мәртәбә һуғырға тейеш була. Һәр уйнаусы үҙ сираты менән һуға. Һуғыусы һуҡҡанда мөғлөй таяғына тигеҙә алмаһа, унын 3 очкоға (мәрәй — *Х.Г.*) башҡаларҙан кәм була. Очколарын 30-ға тултырғандар, ситтә ултырып торалар (оҫта уйнаусылар). Иң аҙаҡҡа ҡалған, артабан «көтөүсе» була. Мөғлөй таягын осороп ебәргәс көтөүсе:

— Мөғлөй-й-й-й — тип, һыҙыҡтан китә лә, һыҙыҡҡа тиклем тын алмай, мөғлөйҙө килтерә.

18. *Ашыҡ** *сағыу.*

Ашыҡты һикертеп, ҡулдан бер ваҡытта ла өҙмәйенсә, йәғни туҡтап тормайынса, ырғытып торалар. Кем күп сөйә, шул еңгән була. Күп сөйгәндең һанына күпме етмәһә (ашыҡ төшөп киткәс), шунса уйнаусының (уйнаусыларҙың) башына сиртәләр.

19. *Шар һуғыу.*

Ике командаға бүленеп алалар. Бер команданың кешеһе шарҙы сөйөп ырғытып тора, ә икенсе команданан берәү шарға таяғы менән бәрә. Шар ҙа, таяҡ та осоп китәләр. Шарҙың хужаһы тиҙ генә шарын алып, алдан, шунда уҡ әҙерләнгән шар соҡорона шарҙы һала. Шул уҡ ваҡытта таяҡтың хужаһы тиҙ генә таяғын барып алып килергә тейеш. Уйын шулай алмаш-тилмәш дауам итә.

19.1. *Шар уйыны.*

Иштәшеп уйнайлар (башҡа яҡтағы кеүек).

20. *Шар һуғыу.*

Уйын ҡоралдары: 1. Ҡаҡма — ауыр, һәлмәк була. 2. Кәшәкә — иң еңеле. 3. Арҡылыбаш — уртаса ауырлыҡта. 4. Шар — ағастың бороломо еренән яһала, ундай шар ярылмай. Ике төркөмгә бүленеү һуңғы ваҡытта уҙаманлашыу юлы менән башҡарыла. Элекке замандарҙа урам менән урам, йәғни нәҫел менән нәҫел ҡапма-ҡаршы уйнағандар. Таш сөйөп кемдәр «һуғыусы», кемдәр «ҡасыу-

---

* *Ашыҡ* малдың бәкәл быуынындағы ваҡ һөйәк. Ул уйын өсөн файҙаланылған. (Ҡара: БТҺ, I том, 100-се бит).

сы» икәнде белеп алғас, уйнаусылар урам буйлап түбәндәгесә урынлашып алалар:

Уйындың маҡсаты: уйнаусылар-ялғаусылар үҙҙәренә ҡаршы уйнаусы-ҡағыусыларҙы алдан билдәләп ҡуйған нөмәгә тиклем ҡыуып алып барырға тейештәр.

Уйын башлана. Һуғыусы уҙаманы беренсе шарҙы һуға, уның командаһындағы ялғаусылар шарҙы артабан ялғап ебәрергә тырышалар. Ҡағыусылар шарҙы туҡтатып кире ыңғайларға тырышалар. Ҡайһы ваҡыт уйын бик ҡыҙып китеп, бөтә уйынсылар бер урынға өйөлөшөп китә, «сәкәләшеү» моменты килеп сыға (шарға аяҡ менән тибергә ярамай). Сәкәләшкән ваҡытта, ҡағыусылар тырышып уйнап, һуғыусыларҙы ҡағыусыға әйләндереп ебәреүе лә мөмкин. Ул ваҡытта уларҙың да билдәләп ҡуйылған урындары бар, шунда тиклем ҡыуып баралар. Элекке замандарҙа, ҡараңғы төшкәс уйнағанда, шарҙы үртәп уйнар булғандар, шар шул саҡ осҡондар сәсеп оса, уйынды тағы ла күңелләндереп ебәргән.

21. *Жөжөк уйыны.*

Дүрткел синет* яһала, бәләкәй таяҡ «жөжөк» тип атала.

Бер кеше көтөүсе була, ҡалған уйнаусылар синет эсенән жөжөктө һуғып ебәреп торалар. Кемдең очкоһы (мәрәйе — *Х.Г.*) йөҙгә тула— шул үҙенән түбән кешене шиҡандата. Көтөүсе осоп килгән жөжөктө тотоп синеткә төшөрһә, уйнаусылар рәтенә баҫа.

22. *Сиртмеш.*

Артыҡ ҙур булмаған ҡырыҡлап шаҡмаҡ эшләйһең. Шуларҙы ус менән һирпеп ебәрәһең. Утырып төшкәнен алаһың, «молоко» була. Утырып төшмәй, ҡара һырты менән төшһә — сиртәһең, тейһә — алаһың, теймәһә — башҡа кеше сиртә.

---

* *Йүгереп* барып килә торған сик «синет» тип атала (ҡара 5.1.)

23. *Теүәтәй йәшереш.*

Ике яҡҡа ла синет сыйып ҡуяһың. Иштәшеп алаһың. Бер партия теүәтәйҙе йәшереп ҡуя, икенселәре — эҙләй. Таба алмаһалар, баштарына сиртәләр.

24. *Бура.*

Ике артель булып иштәшеп алаһың. Бында бәреүселәр, көтөүселәр була. Бәреүселәр берәмләп бәрәләр, тегеләр (көтөүселәр) шарҙы ҡуйған арала, бәреүсе таяғын барып алып өлгөрөргә тейеш, әгәр өлгөрмәһә, был партия көтөүсегә әүерелә. Ә инде көтөүселәрҙең береһе шар ҡуя торған урында була, ҡалғандары шарҙы ырғытып, уға биреп торалар.

25. *Уҡ атыш.*

Уҡты йыраҡҡа, туры атып ярышалар.

26. *Ҡузна бәреү.*

Мәҫәлән, алты кеше. Көтөүсе.

Һәр уйнаусыла берәй таяҡ була. Ҡуйған таяҡ осоп киткәс, көтөүсе килтереп ҡуйырға өлгөрөргә тейеш. Бәргән кеше таяғын алып, йә «Б», йә «А» һыҙығына һалырға тейеш, өлгөрмәһә, үҙе көтөүсе була.

27. *Вәзит һуғыу.*

Бер көтөүсе була, уйнаусылар һуға торған таяҡ менән иксәйҙәр, нисә иксәһә — шул тиклем һуға ала. Көтөүсе осоп киткән таяҡты тотоп алып, сыҙыҡҡа төшөрөргә тейеш. Тота алмаһа, йүгереп барып, шул һуғып ебәргән таяғы ҡырына бара һәм артабан һуға, шулай итеп бик йыраҡ ҡыуып алып китергә мөмкин. Еңелһә — «вәзит иттерҙем», ти.

28. *Һаҡыташ.*

Уҫҡа ун таш алып өҫкә ырғытаһың, һауалағы таштарҙы ҡулдың һыртына төшөрөп, ҡоймаҫҡа тырышаһың.

28.1. *Һаҡыш уйыны.*

Ун таш алып төшөрмәй уйнайһың, йөҙгә тиклем, ике йөҙгә тиклем уйнап була. Кем ҡала, шуның маңлайына сиртәһең.

29. *Туп һуғышыу.*

Таяҡ менән бәреп төшөргән тупты көтөүсе таяҡ башына ҡуйып тора, әгәр беренсе тейгеҙә алмаһа, үҙе көтөүсе булып ҡала.

30. *Сәкән.*

Башта уртаҡлашып ике төркөмгә бүленәләр, ике башҡа билге ҡуйып, шул билгегә еткәнсе тупты (ағастың ороһонан яһала)

сәкәндәре менән һуғып алып китәләр. Сиккә этәрһәләр, ҡаршы команда еңелгән булып һанала.

31. *Йөрөткөс уйыны.*

Йөрөткөс уйынын малайҙар ғына уйнай. Йөрөткөстө йөрөтөр өсөн ошолар кәрәк: арба тәгәрмәсенең ҡыршауы, 50—60 см самаһында тимер сыбыҡ, ҡулға тоторлоҡ уңай ғына йүкә ағасы, таяҡ. Быныһы тотҡа була, тотҡаның оҙонлоғон самалап үҙең ҡуяһың. Яртылаш ҡулса менән тәгәрмәсте этеп йөрөтәһең. Ҡоршауҙың тауышы бер ваҡытта ла бер төрлө булмай. Тәгәрмәсте йөрөткәндә моңло ғына бер тауыш сығып бара. Йөрөткөс йөрөтөүсе малайҙар ярыш та уҙғаралар. Әйтәйек, уйында 6 малай ҡатнаша. Шыбаға тоталар, өҫкә сыҡҡан арты менән баҫып тора, унан 30—40 м алыҫлыҡта бер уйынсы йөрөткөсөн йөрөтөп үтеп китә:

— Кем үтте?

— Хәйҙәр үтте. Әгәр шулай дөрөҫ әйтһә, Хәйҙәр баҫа. Тәгәрмәстең тауышына ҡарап, уйнаусы малайҙың исемен әйтергә тейеш. Кистәрен тауыш йыраҡҡа ишетелә, күрше урамдан берәү йөрөткөсө менән үтһә: «Ана, Ғәлимулла үтеп бара», — тип, үҙенең иптәшен таныш тора.

32. *Таҡта тибеш.*

Һуғыш йылдарындағы малайҙар уйыны. Уйын кәрәк-ярағы: йоҙороҡ ҙурлығындағы таш, киңлеге 10 см, оҙонлоғо 60—70 см таҡта киҫәге, уйнаусылар һанынса 10—15 см оҙонлоғондағы сыбыҡ-таяҡтар. Әйтәйек ете кеше уйнай. Шыбаға тотоп кем көтөүсе икәнде билдәләйҙәр. Таяҡ осона сыҡҡан уйынсы көтөүсе була. Алты уйнаусы типкес таяҡ уратып баҫып торалар. Ә көтөүсе 6 сыбыҡты таҡтаның оҙон яғына һала. Шул саҡ уйнаусыларҙың берәүһе таҡтаның ҡыҫҡа яғына кинәт баҫа, сыбыҡ-таяҡтар ҡайһыһы ҡайһы яҡҡа осоп китәләр. Көтөүсе таяҡтарҙы тиҙ генә йыйып, таҡта өҫтөнә һалырға тейеш. Ул йыйып, һалып бөткәндә, әйтәйек, Ғилметдин ҡасып өлгөрмәһә, көтөүсе:

— Ғилметдин! — тип ҡысҡырып, бармағы менән таҡтаға тейә. Ғилметдин көтөүсегә әйләнә. Әгәр барыһы ла ҡасып бөтһә, көтөүсе, таҡтаһын ташлап, төрлө яҡҡа китеп эҙләргә мәжбүр була. Шул саҡ уйынсыларҙан берәү ҡасҡан еренән сығып, таҡтаны тибеп китергә тырыша. Типһә, ул 1 очко (мәрәй) ала. Был инде, ул икенсе тапҡыр тотолһа, көтөүсе булыуҙан бер мәртәбә ҡотолоуға хоҡуҡ бирә. Һуғыш йылдарында был уйынды ҡыҙ балалар ҙа, ир балалар ҙа уйнар ине.

Ҡыҙҙар уйындары

33. *Соҡор туп.*

Күпме уйнаусы булһа, шул тиклем соҡор яһала. Тупты иң баштағы уйнаусы тәгәрәтә, туп соҡорға төшөү менән, соҡор эйәһенән башҡа уйнаусылар төрлө яҡҡа ҡасып бөтәләр. Туп төшкән соҡорҙоң эйәһе тиҙ генә алып ҡайтарырға тырыша, әгәр тупты бер кемгә лә тейҙерә алмаһа, «үлгән» һаналып, уйындан туҡтап торорға тейеш була. Уйын бер еңеүсе ҡалғанға тиклем дауам итә. Уйынды дауам иткәндә, шулай уҡ баштан ҡабатлана.

34. *Өмә уйыны босмаҡлы.*

Был уйын ҡыҙҙар уйыны. Малайҙар бындай уйын менән булмайҙар. Яңғыҙ ғына торған әбей, йә әбей менән бабай өй йыуырға ҡыҙ балаларҙы өмәгә саҡыралар, 15—16 йәштәге ҡыҙҙар була. Ҡыҙҙар әбейҙең бар булған әйберҙәрен тышҡа сығаралар. Соланға өйөп ҡуялар. Өйҙә бер нәмә лә ҡалмай, хатта баҙҙағы бәрәңгене күршегә сығаралар. Өй йыуыу сатлама һыуыҡ ваҡытта була. Шунан тәҙрәләрҙе алып, өйҙө «өшөтәләр». Шулай бер көн тора. Икенсе көндө яҡшы итеп яғып өйҙө йылыталар. Шунан ҡом менән ышҡып, бысаҡ менән ҡырып, түбә таҡтаһын, стеналарҙы йыуалар, мейесте ағарталар, иҙәнде йыуалар. Өй төн буйына кибә. Иртән ҡыҙҙар иртүк киләләр. Босмаҡлы уйыны уйнайҙар. Дүрт ҡыҙ босмаҡҡа баҫа (дүртенсеһе — мейес босмағына), бишенсеһе — уртала — артыҡ. Бер ҡыҙ: «С-с-с» тип, аҡрын ғына тауыш сығара, икенсеһе менән керпек ҡағып ҡына һөйләшә. Шунда кинәт кенә урындарын алышырға тейештәр. Алышҡан саҡта, бишенсеһе артыҡ босмаҡҡа тороп алһа, теге урынһыҙ ҡала, үҙе ҡарауыллай башлай. Ғәҙәттә ҡыҙҙар бирелеп китеп, бик кинәнеп уйнайҙар. Уларҙың уйынын әбей туҡтата. Әбей иҙән уртаһына балаҫ йәйә. Уртаһына аяғын бөкләп ултырып ала. Ҡыҙҙар әбейҙе уратып ултыралар. Әбей һәр ҡыҙҙың исемен әйтеп, атап теләк әйтә, бәхетле-тәүфиҡлы булыуын теләй. Һәр ҡыҙ әбейҙән теләк алғас, барыһы ла берҙәм генә әйберҙәрҙе өйгә ташып, өйҙө йыйыштырып ҡуялар. Өмә ҡоймағы менән көлөшә-көлөшә сәй эсәләр.

35. *Әбәк-төбәк.*

Ҡыҙҙар уйыны. Бер төркөм ҡыҙҙар йыйыла. Парлашып (икешәрләп — *Х.Г.*) баҫалар. Шунан һәр парҙың береһе «әбәк-төбәк етә алмаһаң — етмеш көрәк» тип, һуғып ҡасып китә. Һуғылғаны ҡыуып етеп, ҡайтарырға тейеш була. Шулай итеп, арығансы йүгерешәләр.

36. *Әбәк*[*].

Был уйынды тик ҡыҙ балалар ғына уйнай. Түңәрәк һыҙалар, киңлеге 10 аҙым була. Уйнаусылар бик күп булһа, ҙурыраҡ та булырға мөмкин. Шыбаға тотоп «көтөүсе»не билдәләйҙәр, осҡа сыҡҡан ҡыҙ — көтөүсе була. Әйтәйек 8 ҡыҙ уйнай, 7-һе уйнай, ә береһе көтөүсе. Уйнаусылар көтөүсегә бармаҡ осо менән тейеп, һыҙыҡтан сығып китергә тырыша, ә көтөүсе кинәт кенә уның үҙенә тейеп ҡайтарырға тырыша. Әгәр ҡайтара алһа, ул көтөүсе булып ҡала. Көтөүсе оҙаҡ көтөп арып китһә, нисә кеше уйында ҡатнашһа, һәммәһе берәр мәртәбә сиртеп сыға. Шунан уйнаусылар араһында уйынға ҡатнашып китә. Бармаҡ менән тейгәндә «Әбәк» тип әйтелә.

37. *Әбәк-көбәк.*

Был уйында малайҙар ҙа, ҡыҙҙар ҙа ҡатнаша ала. Уйында ҡатнашыусылар аяғөҫтө баҫып, теҙелеп торалар. Уйынды башлаусы остағы берәүгә килә лә:

Әбәк-көбәк,
Алтын-табаҡ,
Етә алһаң,
Көмөш ҡалаҡ,
Етә алмаһаң,
Артыңа етмеш көрәк көл![**]

— тип усы менән усына һуға. Шунан ҡасып китә. Тегеһе шунда уҡ ҡыуып-баҫтырып тоторға тейеш. Тота алмаһа, артҡа барып баҫа. Уйын шулай дауам итә.

38. *Һуҡыр тәкә.*

Ҡыҙҙар уйыны. Был уйынды ғәҙәттә ҡыш уйнар булғандар. Шыбаға тотоп «һуҡыр тәкә»не билдәләйҙәр. Кем өҫкә сыҡһа — шул һуҡыр тәкә була. Һуҡыр тәкәнең күҙен таҙа ғына яулыҡ менән бәйләйҙәр. Шунан, уйнаусылар барыһы ла ҡасып бөтәләр. Һуҡыр тәкә уларҙы төрлө ерҙән — өҫтәл аҫтынан, мейес араһынан эҙләй. Һәрмәкләп эҙләй торғас, кемде лә булһа тотоп алһа, теге тотолған уйынсы «һуҡыр тәкә» була.

---

[*] *Әбәк.* Уйындың йөкмәткеһе тулыраҡ тойола һәм унда ҡыҙҙар ғына түгел, малайҙар ҙа уйнауға ишара бар. Ҡара: Башҡорт теленең һүҙлеге. II том, 734-се бит.

[**] *Һамаҡ* көйләп башҡарылыр булған.

II. Йәштәр уйындары

Ҡыҙҙар менән егеттәр бергә уйнаған уйындар

39. *Таштуғай уйындары*

Ауылдын тигеҙ генә ялан урынында уйнала. Егеттәр еңел генә, яҡшы, байрамса кейемдәр кейәләр. Аттарына атланып, һыбай теҙелешеп торалар. Ҡыҙҙар ҙа бик матур тәңкәле кейемдәрен кейеп шунда киләләр. Ошо урындан ярты саҡырым ситтәрәк урында байрам бағанаһы ултыртылған була (бағана булмаһа, билдә ҡуйһаң да була). Байрамды ойоштороусы бабай уйын шарттарын, уйын тәртибен тағы ла бер төшөндөрөп бирә. Һыбай егеттәрҙең береһе шунда торған ҡыҙҙарҙың береһенең яулығын башынан һыпырып алып, байрам бағанаһына сабып барып, урап килеп, ҡыҙҙың үҙенә тапшырырға тейеш. Ләкин шунда торған һәр һыбай егет шул яулыҡты әлеге һыбай егеттең ҡулынан тартып алып, ҡыҙға үҙе илтеп тапшырырға тырыша. Ҡайһы саҡта оҙаҡ алыш китә, яулыҡ әллә нисә мәртәбә ҡулдан-ҡулға күсеп бөтә. Ҡыҙға яулыҡты тапшырған егет еңеүсе була һәм ул байрам бүләген ала.

40. *Әмбәл-дөмбәл.* Был уйынды егеттәр ҙә, ҡыҙҙар ҙа уйнай. Уйнаусылар теҙелеп ултыралар. Шунда берәүһе уйынды башлап ебәрә: бер яҡ баштан һәр кешегә төртөп, бер һүҙ тура килтереп таҡмаҡлай:

Әмбәл-дөмбәл,
Ҡаҙыял-баҙыял,
Ҡайҙан килгән
Ҡара ҡуян?!
Йүгереп сыҡ![*] — ти.

Һуңғы «йүгереп сыҡ» тигән һүҙ кемгә тура килһә — шул кеше тороп, шул рәүешсә ҡабатлай.

---

[*] *Был уйындың* таҡмағы оҙон булған, көйләп башҡарылған. Уйындың маҡсаты: уйында ҡатнашыусыларҙың хәтерен сыныҡтырыу, көй оторға өйрәтеү.

41. *Курешеү.*

Уйнаусылар ике тигеҙ төркөмгә бүленеп, һәр ике яҡ уйынды алып барыусы һайлайҙар. Уйынды беренсе төркөм башлай. Беренсе төркөмдәге һәр уйнаусы исеме икенсе төркөмдәге һәр уйнаусыға әйтелә. Мәҫәлән, Зәкиә тигән ҡыҙҙың исеме Ғайфулла тигән малайға тура килде икән, ти. Зәкиә, үҙ исеме кемгә әйтелгәнен белеп, барып күрешергә тейеш. Уйын шулай дауам ителә. Иң аҙаҡ ниндәй пар табыша алмай, уларға «яза» бирелә. Мәҫәлән: йырлау, бейеү.

Һуңынан уйын ҡабаттан башлана. Был ваҡытта инде уйынды икенсе төркөм башлай.

42. *Үгеҙ-йөҙөк.*

Уйында ҡатнашыусылар йөҙөк һалыусы һәм «үгеҙ» һайлайҙар. Йөҙөк (уның урынына башҡа әйбер ҙә ҡулланырға мөмкин) йөҙөк һалыусыға бирелә. Уйында ҡатнашыусылар теҙелеп ултыралар, уларға арты менән «үгеҙ» ултыра. Йөҙөк һалыусы уйнаусыларҙың ҡуш усына йөҙөк һала. Йөҙөк кемдә икәнлеген «үгеҙ» дөрөҫ әйтергә тейеш. Был бер нисә тапҡыр ҡабатлана. Ошоларҙан һуң «үгеҙҙе» һыу эсерәләр, ә йөҙөк һалыусы йөҙөктө йәшерә. «Үгеҙ» йөҙөктө табырға тейеш. Йөҙөк табылғас, «үгеҙҙе» «һуялар». Теҙелешеп «ашарға» ултыралар. Ләкин «үгеҙ» «бешеп етмәгән» була, ул ҡапыл һикереп тороп уйнаусыларҙы баҫтырып «һөҙә башлай». Уйнаусылар «һөҙөлөп» бөткәс, уйын ҡабаттан башлана.

43. *Һәүәнәй* әбей.*

Был уйында егеттәр, ҡыҙҙар ҡатнаша. Бер ҡыҙ Һәүәнәй әбей була, уны шыбаға тотоп билдәләйҙәр. Әйтәйек, ун егет, ун ҡыҙ ҡатнаша. Егеттәр теҙелеп баҫып торалар. Һәүәнәй әбей билғау менән билен быуып ала, таяғына таяна. Ҡыҙҙарын икешәр-икешәр итеп теҙеп алып килә. Әйтәйек, бер ҡыҙға Әдисә, икенсеһенә Бәдисә итеп исем ҡушалар. Һәүәнәй әбей:

Урамдан үтеп барам,
Дәүә менеп ҡаршыма
Бер ҡыҙ сыҡты кейәүем, тип.
Мин аңарға зары ҡылдым,
Ҡалмайым, тип...
Салғайыма йәбеште... ҡал...

---

* Әбейҙең исемелер, моғайын. Һүҙлектә аңлатмаһы юҡ.

— Әдисәме, Бәдисәме?
— Әдисә, тиһә, Әдисәне ҡалдыра.
Уйын яңынан башлана.
44. *Үгеҙ уйыны.*
Шыбаға тотоп, эҙләүсене билдәләйҙәр. Ҡалған уйнаусылар теҙелешеп ултыралар, эҙләүсегә күрһәтмәй генә бер әйбер йәшерәләр. Эҙләүсе икенсе яҡҡа, йә тышҡа сығып тора. Эҙләүсе керә. Теҙелеп ултырғандарға иғтибар менән ҡарай. Әйберҙе эҙләй. Тапһа, кемдән тапҡан, шул кешенең битен ҡоромға буяп, «үгеҙ» итеп ҡуя. Таба алмаһа, үҙенекен буяп ҡуялар. Уйын яңынан башлана.
45. *Йондоҙ һанау.*
Кемдендер атаһы-инәһе ҡунаҡҡа китһә, шунда егеттәр, ҡыҙҙар йыйыла. Егеттәр шыбаға тотоп, йондоҙ һанарға кем башлап сыҡҡанды билдәләйҙәр. Икенсе — икенсе сыға, өсөнсө — өсөнсө сыға, һәм артабан шулай китә. Егеттәр үҙҙәренә оҡшаған ҡыҙҙар менән парлашып ултыралар. Уйын башлығы беренсе парҙы сығарып ебәрә:
— Барығыҙ йондоҙ һанағыҙ! Һанап керәләр, 4—5 минут ваҡыт үтергә мөмкин.
— Һананыҡ.
— Нисә йондоҙ?
— Бер йондоҙ, Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо.
Икенсе пар һанап керә:
— Нисә йондоҙ?
— Ете йондоҙ, Етегән йондоҙ күрҙек.
Һәр сыҡҡан пар йондоҙ исемен әйтергә тейеш, ҡабатларға ярамай.
Йондоҙ исемдәрен белмәгән пар йондоҙ һанарға сыға алмай.
46. *Татыулыҡ.*
Борон заманда йәштәр аулаҡ өйҙә уйнар булғандар. Бер уйын башлығын һайлап ҡуялар. Ул ҡулына ҡайыш ала ла, егет менән ҡыҙҙарға парлашып ултырырға ҡуша. Әйтәйек, ун пар булды. Һәр егет уң ҡулы менән ҡыҙҙың һул ҡулын тотоп ултыра. Уйын башлығы беренсе пар эргәһенә килә һәм ҡыҙға һул ҡулын күрһәтеп тоторға ҡуша ла, һул ҡулына ҡайыш менән һуға:
— Татыумы?
— Татыу! — тигән булалар.
Һуҡҡан саҡта ҡыҙҙың йөҙөндә ауыртыу һиҙелһә, йә ҡысҡырып ебәрһә, был пар уйындан сығып тора. Шулай итеп, һәр пар

иләктән иләнә-иләнә, иң татыу пар ғына тороп ҡала. Егеттең ҡулына һукмайҙар, бында буласаҡ «килендең» ныҡлығын тикшереп ҡарайҙар. Уйындан еңелеп сыҡҡан парҙарҙы, йә бейетәләр, йә йырлаталар. Икәүһен бер юлы өҫтәл аҫтынан сығаралар.

47. *Ҡоҙаса сәйе уйыны.*

Боронғо уйын. Ҡунаҡҡа барғанда, шунда йәш ҡоҙалар ҙа була бит инде. Йәш ҡоҙасалар, йәғни еткән ҡыҙҙар ҡоҙаларҙы бер аулаҡ өйгә сәйгә саҡыралар. Сәй эсерәләр, бейеп-йырлап хөрмәт итәләр. Уйын-көлкө лә була. Әйтәйек, бер шаян ҡоҙаса икмәк менән майҙы бер ҡоҙаға һоғондора, шул саҡ ауыҙына һылап та ҡуя. Ҡоҙалар ҙа оттормай, ауыҙҙарына һыланған майҙы ҡоҙасаларҙың шәлдәренә, яулыҡтарына һөртәләр. Шаярышып сәй эсеп бөткәс, сынаяҡты түңкәргәс, ҡоҙа сынаяҡ өҫтөнә көмөш тәңкә һала. Уйын шулай тамамлана. Эске-маҙар бер ҙә юҡ.

48. *Тырпыса* уйыны.*

Уйында ҡатнашыусылар теҙелешеп ултыралар. Ҡыҙҙар ҙа, егеттәр ҙә уйнарға мөмкин. Уйынды башлап ебәреүсе:

«Инәй, инәй, тырпыса алырым», – тип һамаҡлап, үҙенә оҡшағанды тартып ала ла, барып ултыра. Уң яҡтағы күршеһенә төртә. Шунан был тороп китергә мәжбүр була. Ул да шулай һамаҡлап, үҙенә иш ала.

49. *Һаҡыташ** уйыны.*

Уйынды уйнар өсөн 15 бөртөк шыма таштар кәрәк. 15 ташты ла уска алып, өҫкә ырғытаһың, 15-ен дә ҡулдың һыртында тотоп алып ҡалырға кәрәк. Әгәр төшөрһә, күпме төшһә, шунса йырлай, йә бейей. Кис ултырғанда бик яратып уйнар булғандар.

50. *Һаба*** йыйыу уйыны.*

Кәләш алған егет-кейәү яғынан ҡоҙалар килгәндә башҡарыла был уйын. Оло хөрмәт булғас, йәш ҡоҙалар ҡунаҡта ҡатнашҡан кешеләргә йөрөп ашамлыҡтар йыялар. Бер аулаҡ өйгә йыйы-

---

**Һүҙлеккә* ярашлы, морондоҡ мәғәнәһен бирә, йәғни ҡиәмәтлек әсәй. Морондоҡ әсәгә ҡыҙ итеп алынған ситтән төшкән килен кеше. (Ҡара: БТҺ, I т., 819-сы бит).

** *Һаҡы* диал. ашыҡ. (Ҡара: БТҺ, II т., 567-се бит).

*** *Һаба* тиренән яһалған ҡымыҙ һауыты. Йыйыу көндөҙ ҡоҙалар эскән ҡымыҙҙың ҡалдығын йыуыу була.

лалар. Ҡурайсы саҡыралар. Аш бешерәләр, төндә «һаба йыйыу» уйыны үткәрәләр. Уйын-көлкө була, бейешәләр-йырлашалар.

51. *Ҡаҙыҡ уйыны.*

Был уйынды ҡыҙҙар һәм егеттәр уйнай. Тик ҡыҙҙар ғына уйнаған осраҡтар ҙа була. Уйында ҡатнашыусылар парлы-парлы, йәғни бер егет, бер ҡыҙ ҡапма-ҡаршы баҫалар. Йөҙ аҙым ситтә билге ҡуялар. Ул берәй бағана, йә берәй ятҡан таш булырға мөмкин. Колоннаның башына ишһеҙ егет, йәғни «ҡаҙыҡ» барып баҫа. Ҡаҙыҡ уйын башланғанды белдереп, сәпәкәй итеп, усына һуға. Шул саҡ 1-се пар йүгерешеп китәләр, береһе — колоннаның уң яғынан, ише — һул яғынан. Ҡаҙыҡ ҡыҙҙы тотоп алырға тырыша, 1-се пар билгене урап, колоннаның ҡойроғона баҫһалар, икәүһе ҡала. Ә инде ҡаҙыҡ ҡыҙҙы һалдырып алһа, үҙе колоннаға баҫа. Ишһеҙ ҡалған егет ҡаҙыҡҡа әйләнә. 1-се пар колоннаның ҡойроғона баҫҡанда баштан башлап теҙелеп тороусылар араһынан үтәләр, шунан ҡойроҡҡа баҫалар. Уйын шулай дауам итә: икенсе пар йүгереп китә, ҡаҙыҡ тота алмаһа, уйынсылар теҙелеп торған аранан утлы ҡойроҡҡа баҫалар. Артабан — өсөнсөләр һ.б.

52. *Серләшеү.*

Еткән ҡыҙҙар һәм егеттәр уйыны. Уйында ҡатнашыусы ҡыҙҙар, егеттәр ҡулға-ҡул тотошоп әйләнеп, йәғни түңәрәк яһап йөрөйҙәр. Уртала бер ишһеҙ егет була. Түңәрәктәгеләр:

Ағиҙелдә аҡ пароход
Ниңә ҡысҡыра бушҡа.
Һөйләшер һүҙегеҙ булһа,
Сығып керегеҙ тышҡа,

— тип йырлап, таҡмаҡ әйтәләр. Шул саҡ урталағы ишһеҙ егет үҙенә оҡшаған бер ҡыҙҙы саҡырып тышҡа сыға һәм шул уҡ ваҡытта үҙенең урынына бер егетте уртаға ҡалдыра. Ул егеткә шулай уҡ таҡмаҡ әйтәләр, ләкин беренсе булып сыҡҡан пар икенсе пар сыҡҡанда, тыштан инеп кругҡа баҫҡан булырға тейеш. Уйын шулай дауам итә. Был уйын ялыҡтырғас, шунда уҡ икенсе уйынға күсеп китәләр.

53. *Билмау йәшереү.*

Билмау төйнәлгән була, аяҡ аҫтынан йәшереп йөрөтәләр. Улай ғынамы: «Шылдыр-шылдыр сос бул!» — тип һуғып та алалар. Кемдән тапһа, шул уртаға ултыра инде.

Егеттәр уйындары

54. *Аҡ тирәк (вариант).*

Уҙаҡлашып алалар. Берәүҙәре канауҙа була. Икенселәре билгеле бер урында була. Әйтәйек, Ғайса иптәштәре канауҙа, былар һорай:

Аҡ тирәк, күк тирәк,

Ат яҡшыһы, кем кәрәк?

— Ғайса кәрәк! — тиҙәр.

Шунан барыһы ла күлмәктәрен һалалар ҙа, Ғайсаны тоторға баралар. Ә Ғайса иптәштәре менән тырым-тырағай таралып бөтә. Шулай итеп, баҫтырышып арып бөтәләр. Ғайсаны таба алмаһалар, уйын яңынан башлана.

55. *Аҡ тирәк (вариант).*

Был уйын күҙ бәйләнгән ваҡытта уйнала. Уйнаусылар уҙаҡлашып ике төркөмгә бүленеп алғас, байтаҡ ҡына аранан һыҙыҡ һыҙып, шунда урынлашып алалар. Шунан ике яҡ та түбәндәгесә әйтешә башлай.

— Аҡ тирәк.

— Күк тирәк.

— Күктә, күктәниләр бар?

— Сыбар ала ҡошлар бар.

— Ҡанатында ниләр бар?

— Йопар менән шәкәр бар.

— Йопарыңды һат миңә.

— Ник һатайым мин һиңә.

— Тейәр хаҡынды әйт миңә.

— Һиңә кем кәрәк?

— Сыбар ала ҡош кәрәк,

— тип, уйнаусының исемен әйтә. Шунан бөтә уйнаусылар билдән тиклем сисенеп, ҡаршы яҡҡа таба баралар. Эркелешеп, ошо ҡаранғыла, буталсыҡта ҡаршы яҡты танып, алып ҡалырға тырышалар. Тотоп алып ҡалһалар, ул «үлгән» булып уйнай, ҡатышмай тора.

Ҡыҙҙар уйындары

56. *Бәхет һынау уйыны.* Күберәк ваҡыт был уйынды ҡыҙҡырҡын уйнар булған. Егет-еләнгә лә уйнарға ярай. Уйынды

алып барыусы шаталаҡ тәбиғәтле, йор һүҙле кеше була ғәҙәттә. Уйын башланғас, уйын башлығы уйнаусыларҙы шыбаға тоттора. Иң аҙаҡҡа ҡалған соланға, йәки икенсе өйгә сығып тора. Шул саҡ башлыҡ башҡа уйнаусылар күҙ алдында бер сынаяҡ аҫтына икмәк киҫәге һала, икенсеһенә — бәләкәс кенә көҙгө киҫәге, өсөнсөһөнә — күмер, дүртенсеһенә — аҡбур, бишенсеһенә — йөн, алтынсыһына — һуған һала. Хәҙер инде икенсе яҡтағы, яҙмышын белергә теләүсе уйынсыны саҡырып килтерәләр. Ул сынаяҡ аҫтында ниндәй нәмә ятҡанын белмәй. Уйын башлығы бер сынаяҡты асырға рөхсәт итә. Әйтәйек, ул көҙгө киҫәге ятҡан сынаяҡты асты. Уға: «Холҡондо һәйбәткә төҙәтмәһәң, үҙеңә үҙең ҡарап ғүмереңүтер», — тиҙәр. Икмәкте асһа — байлыҡта-муллыҡта йәшәрһең, тиҙәр. Күмерҙе асһа — ғүмерең оҙон булыр, тиҙәр. Аҡбурҙы асһа — ирең бур булыр, тиҙәр. Йөн ятҡан сынаяҡты асһа — ҡарт иргә сығырһың, тип, дыу килеп көләшәләр.

57. *Тартышмаҡ.*

Биш ҡыҙ һикегә теҙелеп ултыра, ә бишеһе һике ситенә ултырып тегеләрҙе бер ыңғайҙан һөйрәп төшөрөргә тырышалар (кеше күп булырға мөмкин).

58. *Күмер йөҙөк.*

Уйнаусылар һике ситенә теҙелеп ултыралар һәм бер уйынсының йөҙөгөн йәшерәләр, бөтә ерҙәрен ҡапшап эҙләп бөтә, таба алмаһа, битен ҡором менән буяп ташлайҙар. Шул бер үк кешене бер нисә мәртәбә лә буяп ташлаған осраҡтар була.

59. *Аҡ тирәк.*

Элек «Аҡ тирәк — күк тирәк» уйыны булды. Ике яҡтан да унлаған ҡыҙ теҙелеп торaһын. Шунан теге ҡыҙҙарҙың исемен әйтеп уйнайһын.

— Аҡ тирәк, күк тирәк,
Һеҙгә беҙҙән ни атлы
Ҡыҙ кәрәк?
— Шәрифә атлы ҡыҙ кәрәк.

Шулай итеп барыһы ла бер яҡҡа күсеп бөтә, ул яҡта бер үҙе ҡалғас, тағы үҙе теләгән кешене саҡыра башлай.

59а. *Һан уйыны.*

Мал ашығын тәгәрәтеп уйнау булды, нисек барып төшә, шуға ҡарайһың.

III. Ир-егеттәрҙең уйындары

60. *Мәләкут*[*].

Ер-һыу биттәре асыла башлағас та егермеләп-утыҙлап малайҙар, егеттәр, ҡайһы саҡта ирҙәр йыйылып алалар. Уҙаҡлашып ике төркөмгә бүленеп алып, *мәләкут* уйыны уйнар булғандар. Түңәрәк һыҙыҡ һыҙалар. Һыҙыҡтың ҙурлығы уйнаусылар һанына ҡарап була. Тығыҙ булырға тейеш түгел.

Тотамлашып кемгә һыҙыҡтың тышында йәки эсендә уйнарға кәрәклекте билдәләйҙәр. Туп сепрәккә ат тиҙәге һалып, төйнәп эшләнелә. Эстәгеләр туптың кемдә икәнен белмәйҙәр. Тыштағыларҙан берәү туп менән бәрә, тейһә, эстәгеләр тиҙ генә ҡасып, таралышып барыусы тыштағыларға тейгеҙергә тырышалар, әгәр тейгеҙә алмаһалар, бөтәһе лә «үлә». Эстәге команда тышҡа сыға, йәғни урын алышына. Әгәр тыштағы бәргәндә тейгеҙә алмаһа, тыштағылар бөтәһе лә «үлә». Был уйынды уйнағанда уйнаусы ялғышлыҡ эшләһә, бар коллектив яуап бирә.

61. *Һал-һал, һалһаң да асыуланмайым.*

Был уйын малайҙар, егеттәр, ирҙәр уйыны, хатта бабайҙар ҙа уйнар булған. Ҡатын-ҡыҙ заты был уйынды уйнамай, тик мәрәкә итеп ҡарап тора ғына ала. Элек кис ултырғанда уйнар булғандар, бигерәк тә ҡыш көндәрендә.

Уйын ошолай башлана. Кис ултырыу уйынының ойоштороусыһы сит ауылдан килгән ҡунаҡ егетен, йә был уйынды белмәгән ошо ауыл егетен ҡаҡ салҡан түбә таҡтаһына ҡаратып һалып ҡуя. Битенә тун еңен тура килтереп, тун яба. Шунан былай әйтергә ҡуша:

— Һал-һал, һалһаң да асыуланмайым, — тиң. Егерме-утыҙ кеше тын да алмай ҡарап тора, теге егет шулай тип әйткән саҡта ғына соланда ултырған биҙрәнән боҙло һыу алып сүмес менән еңгә ҡойоп ебәрә. Ҡарап тороусылар гөр килеп көлөшәләр. Егет

---

[*] *Мәләкут* (ғәр.) иҫк. кит. 1. Батшалыҡ. (Ҡара: БТҺ, I т., 851-се бит).

һиҫкәнеп китеп, һикереп тора, ләкин асыуланырға тейеш түгел. Уйындың шарты шунда. Әгәр асыуланһа, бейергә, йә йырларға ҡушалар.

62. *Таҡыя типкес.* (Бертеүеш).

Уйнарға теләүселәр бөтәһе лә йыйылғас, бер таяҡ алып шыбаға тоталар, кем өҫкә сыҡһа — шул «көтөүсе» була. Көтөүсе түңәрәк һыҙыҡ уртаһына баш кейемен һалып ҡуя һәм ҡарауыллай. «Тибеүселәр» һыҙыҡты әйләнеп йүгерешеп йөрөйҙәр. Көтөүсе ҡарауыллаған баш кейемен тибеп алып китергә тырышалар. Кем дә булһа тыштағыларҙан тибеп алып китергә ынтылһа, көтөүсе уның үҙенә тибергә тырыша, әгәр типһә, ул көтөүсегә әйләнеп, баш кейемен һалырға тейеш була. Ә инде тибеп алып китһәләр, көтөүсе улар артынан йүгереп етеп, баш кейемен һалдырып алырға тырыша, әгәр һалдырып алһа, тиҙ генә түңәрәк һыҙыҡҡа илтеп һалырға ашыға. Тибеүселәр, шулай уҡ, һыҙыҡ эсенә төкөрөп, үҙҙәренең килеп етеүҙәрен күрһәтергә тейештәр, кем дә булһа бер кеше аҙаҡҡа ҡалһа — шул көтөүсе була.

63. *Шар уйнау уйыны.*

2 төп, ике оло кеше, аҙаҡ ике кеше. Егет менән бала оҙаҡташалар, улар ҡырғараҡ барып, үҙҙәренә берәй йәнлек, ҡош исемдәрен бирәләр. Әйтәйек, ҡарсыға, бөркөт. Ике аҡ таш, ҡара таш, усларына йомалар ҙа, «төп» ике кеше ҡаршыһына килеп баҫалар һәм оҙаҡташалар: «Әйтке-мәйтке — төп ала, сәлә әйтке, аҡ әллә ҡара ташмы, йәки ҡарсыға әллә бөркөтмө?» — ти. Төпләрҙең берәүе: «Миңә аҡ таш кәрәк», йә «бөркөт кәрәк», — ти. Ҡай төп нимәне әйтһә, шул уныҡы була. Ҡайсаҡ берәйһе насар булһа, талаш та китә. Кире ҡабат оҙаҡташалар, быныһын да тик тороп ҡалған төп алырға тырыша. Ҡайсаҡ икеһе бергә лә әйтеп ҡуйып ебәрәләр. Бына шулай, бар булған йыйылған балалар, егеттәр, урта йәштәгеләр ҙә ике төркөмгә бүленә.

Бер генә рәттән соҡор ҡаҙыла, һәр берәүгә бер соҡор. Һәр берәүҙең үҙенә самалап эшләнгән шар таяғы була. Таяҡ ҡоро, ҡаҡ, елде булырға тейеш. Бер яҡ көтөргә сыға. Һәр береһе йәтешләнеп, йәтеш урында, күберәге бер рәттә тороп, көтәләр. Уларҙа йыуаныраҡ сыбыҡтар, таяҡ, тун, сәкмәндәр була, йә бүрек менән дә осоп килгән шарҙы тоталар. Соҡорҙағылар һуғалар, соҡорҙоң уң яҡ ситендә төп оҙаҡ тора, ҡалғандарында оҙаҡташтар тора.

Шар башлап ваҡ, бәләкәй малайҙарҙан башлана ла, нәүбәт менән башҡалар ҙа шарҙы һуға башлайҙар. Төп иң аҙаҡтан һуға. Шар һуғыла. Һуғыусы, мөмкин икән, таяғына йүгерә. Булмай икән, шарҙың ситкә үтеүен йә алыҫ китеүен көтәләр ҙә, бары ла, күберәген сосораҡ, шәп тә йүгергән малай таяҡтарҙы йыйып алып килә. Көтөүселәр шарҙы үрҙән ташлайҙар. Ә соҡорҙағы сос төп тота ла, соҡорға шарҙы һалырға тырыша. Соҡорҙағылар табандарын шылдырып барып ҡапларға тырышалар, ә шарҙы һалыусы һалыу яғын ҡарай. Тырыша-тырмаша шар асыҡ соҡорға һалындымы, көтөүсе төркөмдәр һуғырға күсәләр. Тегеләр инде көтөүгә баралар. Уйын шулай шарҙың соҡорға һалыныуы менән нәүбәтләнә бара.

P.S. Туп уйыны ла шулай була. Туп тейҙеме, төркөмдәр алышыналар.

64. *Соңҡор* уйыны.*

Шул тәртиптә оҙаҡташыла ла, һәр соңҡорҙа берәр малай кеше тора. Туп соңҡорҙар буйлатып ҡына тәгәрәтелә. Уны аранан берәүһе тәгәрәтә, туп кемдекенә төшһә, ул, туп менән кемде етте шуны һуға, туп тейгәндең соңҡорона ваҡ бер таш мәрәй итеп һалына. Теймәй икән, йәғни теге һуғыусы тупты тейҙерә алмаһа, уның соңҡорона һалына. Аҙаҡтан, кемдең соңҡоронда күпме мәрәй иҫәбенә, бер беренең мандайҙарына** сиртешәләр.

Был уйын бөтөргә лә, дауам итергә лә мөмкин. Теләккә ҡарап.

65. *Сәкән*** (хоккеист).*

Оҙаҡташалар. Бар кешеләр, балалар ике төркөмгә бүленәләр ҙә йә шар, йә берәй шундай нәмәне ҡулдарына сәкән тотошоп алып сәкәләшәләр, бер яҡта ғына. Берәү йә икәү була, ҡарышлашалар, шар билдәле ситтән сығарыла. Мәрәйҙәр мәрәйгә ҡарап шатланып бара. Бер билдәле алыҫлыҡтан кемдәрҙең мәрәйҙәре аҙ, күптәре уларға атланалар ҙа, күтәреп йөрөтөп әйләнәләр. Мәрәй түләнә.

66. *Билге тибеү.*

Түңәрәк һыҙыҡ һыҙып уртаһына баған сәсеп (ҡаҙап — *Х.Г.*) ҡуяһың. Уйнаусылар икегә бүленеп алып, береһе эстә таяҡты

---

* *Соҡор* мәғәнәһендә булырға тейеш. Һүҙлектә соңҡор һүҙе юҡ.

** диал. *маңлай.*

*** *Көҙ* уйнай торған туп һуғыу уйыны. (Ҡара: БТҺ, II том, 276-сы бит).

һаҡлап, икенсе команда шул таяҡты алырға тырыша. Алырға иткән ваҡытта эстәгеләр тибергә тырыша, әгәр тибә алһа, тимәк теге «үлгән» була. Әгәр тыштағы команда таяҡты алһа, эскә, баған ҡырына керә. Уйын барышында эстә лә, тышта ла берәр кеше ҡалыуы мөмкин. Был осраҡта «ҡыйҙырышыу» була. Ике (уйынсы — *Х.Г.*) параллельно (бер үк ваҡытта — *Х.Г.*)йүгереп киләләр һәм бер-береһенең алдына сығырға тырышалар, кемдеке сыҡһа, шул команда еңгән була.

67. *Билге.*

Оҙаҡташалар. Үҫмерҙәрҙән берәү айырылып, осланып сәселгән (ергә ҡаҙалған — *Х.Г.*) шыйыҡ тал йә сауҡа сыбыҡтың осонан тотоп ала ла, сыбыҡты бөгөлгән тиклем бөгөп, уны түһәрәп (тирәләп — *Х.Г.*) әйләнә. Ситтәгеләр ул билгене тотарға, нисек тә һәрмәргә тырышалар. Ә теге билгесе малай аяғы менән ташланыусыға тибәргә, эләктерергә тырыша. Аяғы кемгә, берәүгә тейһә, ул билге төбөнә баҫа, сыбыҡты тотоп ул әйләнә, ә тегеләре тағын тоторға тырышалар.

68. *Атҡыя*[*].

Был сайырҙы, ауыр һәм йоҡа трансанан эшләйҙәр. Бер яҡ осо түңәрәкләнә лә, ҡалған өлөшө ослая, уҡ шикелде итеп яһала, урта (баш яҡҡа яҡын) тоҡандап еп тағыла. Ул тоҡан эйелеп, һығылмалы тал, йә муйыл ағас менән эләктереп алына ла, күпме бөгөлә, шул тиклем ҡул көсө менән бөккәнгә тартып ебәрелә. Ул бөгөлөү көсө менән үргә оса, алыҫҡа барып та төшә. Бына хәҙергә шул.

---

[*] *Атҡый* — таяҡ осонан һелтәп осора торған туҙ ҡанатлы ҡыҫҡа уҡ. (Ҡара: БТҺ, I т., 89-сы бит).

IV. Ҡатын-ҡыҙҙар менән балалар уйындары

69. *Ҡарға буткаһы.*

Был уйын май айында була. Башта бик ныҡ әҙерләнәләр. Шунан бер бейек тау башына менеп байрам итә башлайҙар. Еткән егеттәргә, ирҙәргә был байрамда булырға ярамай. Ҡатын-ҡыҙҙар шунда ҡайындар ботағына тәңкәләр, йөҙөктәр ҡушып үреп бөтәләр. Төрлө-төрлө уйындар уйнайҙар, йырлашалар. Ашап-эсеп, көнө буйына йөрөп ҡайталар. Шунан һуң инде, ошо байрам үткәс, йәйләүгә күсергә тотоналар. Ыҙмала бер-ике генә кеше ҡала. Әйләнеп ҡайтҡансы тирә-йүнде үлән баҫып бөтә.

69.1. *Ҡарға буткаһы**.

Һәр ара, йәғни теге йәки был нәҫел бик яҡшы итеп аш-һыу әҙерләгәс, 10—15 шаршауҙы бергә теккәс, самауырҙы, һауыт-һабаларҙы, аҙыҡтарҙы тейәп, билдәле булған йәмле генә урынға йүнәләләр. Унда көнө буйына тиерлек ашап-эсеп ял иткәс, ширма рәүешендә буйҙан буйға һуҙылып ҡуйылған шаршауҙы икенсе бер матур урынға алыштырып ҡоралар. Шунда ял итәләр, миннек, сәскәләр йыялар. Төрлө матур урындарҙы ҡарай-ҡарай, кискә генә урап ҡайталар.

69.2. *Ҡарға буткаһы.* Сәсеү бөткәс, ҡарға буткаһына сығалар. Күп итеп, төрлөһөнән ашарға алалар. Шаршауҙарҙы бер-бере-

---

*Б*оронго* «Ҡарға буткаһы» уйыны ошондай үҙгәреш кисергән. Ҡарға буткаһы үткәрә торған урын ғәҙәттә бер өйрәнелгән ерҙә булған. Әхмәр ауылында, элек «Иҫке ыҙма» тигән ерҙә, тирә-яғы күк булған матур, йәмле урында байрам иткәндәр. 1910 йылдарҙан һун ауылдар йыйылып Ҡарға буткаһын байрам итеү һирәгәйгән, унан һуң ара менән ара саҡырышып, күмәкләп бер урында йыйылыбыраҡ байрам итеү йышайған, XVII—XIX быуаттарҙа, унан да элегерәк замандарҙа, был байрамда йөҙәрләгән кешеләр, хатта унан да күберәк халыҡ ҡатнашыр булған. Ырымбур башҡорттары: «Ҡарға буткаһы байрамында тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡатнаша, малайҙарға ҡатнашырға рөхсәт ителә», тиҙәр. Ҡарға буткаһына сығыу иҫкесә апрелдең етеләрендә була.

һенә тегеп, оҙон итеп, күләгә яһайҙар, ашап-эсеп, бейеп-йырлап, уйын-көлкө ҡороп ял итәләр. Бер-береһенә ҡунаҡҡа саҡырышалар.

— Ниңә «Ҡарға бутҡаһы» тигәндәр?

— Ҡарға ваҡыты булғанға шулай атағандарҙыр инде. Боронораҡ ваҡытта бутҡа һалып китер булғандар:

— Мәгеҙ, ҡарғалар, ашағыҙ! — тип.

69.3. *Ҡарға бутҡаһы**.

Сәсеү бөткәс, тиреҫ һуҡҡас, май айында уйнала. Бик шәп итеп әҙерләнеп, күстәнәстәр алып, матур яланға сығалар. Күләгә булһын өсөн шаршау ҡороп ташлайҙар. Бер-нисә ауыл кешеләре көн буйына ҡунаҡ саҡырышып, бейешеп, уйын-көлкө яһап йөрөйҙәр. Йәш егеттәр үҙҙәре бер ергә барып көрәшәләр. Шулай итеп байрам итеп ҡайталар.

69.4. *Ҡарға бутҡаһы.*

Май айы етһә, ҡырға сығалар. Шул яланда 3—4 ҡаҙан бутҡа бешерәләр, самауыр ҡайнаталар. Уйнайҙар, бейешәләр, «ҡарға бутҡаһы» бит инде. Беренең әйберен икенсеһе йәшергән булалар, көлөшәләр, үпкәләш-асыуланыу ҙа юҡ.

70. *Ҡымыҙ ҙа бар, бал да бар.*

Һәр йыл, ҡар бөтөп көндәр йылынғас, бөтә ауылдарҙың ҡыҙҙары хәбәрләшеп, һөйләшелгән бер көндө яҡындағы матур бер тауға «ҡарға бутҡаһы» тигән уйын үткәрергә сығырҙар ине. Унда бутҡа бешереп, сәй эсеп, таҡмаҡ әйтешеп, ҡумыҙ тартып, бейешеп уйнарҙар ине. Аҙаҡтан төрлө-төрлө уйындар китер ине. Шул уйындарҙың береһе «ҡымыҙ ҙа бар, бал да бар», утыҙ-ҡырҡ ҡыҙ бер ҡат булып теҙелешеп торалар. Уйынды башлаусы ҡыҙ уң яҡ ситтә торған ҡыҙға бара ла:

— Ҡымыҙ ҙа бар, бал да бар,

Эскең килһә, беҙгә бар! — ти ҙә, икеһе лә — береһе сафтың алдынан, икенсеһе артынан икенсе осҡа йүгерәләр. Кем элек

---

* *Уйын* 1920 йылдарға тиклем шәп барған. Ололар, ҡарттар һирәк ҡатнашҡан. Ошо уйын байрамында икенсе ауыл кешеләрен үҙ табындарына ҡунаҡҡа саҡырыр булғандар.

— Бабай, ниңә һуң «Ҡарға бутҡаһы» тигәндәр, — тип һорауға: «Ҡарға кеүек шаулашып торғандар бит, шуға күрә шулай атағандарҙыр», — тип яуапланы.

барып етһә, сафҡа тора, өлгөрмәгәне һүҙҙе яңынан ҡабатларға уң яҡҡа китә.

71. *Үгеҙ йөҙөк.*

Малайҙар, йәш еңгәләр ҡатнаш-ҡатнаш теҙелешеп ултыралар. Шунда уйында ҡатнашыусы берәү: «Йөҙөк йәшерәм», — тип һәр кемдең усына һалған була, һиҙҙермәҫтән генә берәүһенең усына йомдора. Шунда уйында ҡатнашҡан бер шаян еңгә күрһәтмәйсә генә усын, бармаҡтарын ҡоромға буяп ала ла: «Йөҙөктө табайым әле!» — тип, эҙләй башлай. Эҙләгән ваҡытта уйнаусыларҙы мәрәкә итеп ҡоромға буяп та китә. Әйтәйек, йөҙөктө бер йәш егеттән таптылар, ти. Шул егетте: «Үгеҙ итеп ҡуябыҙ!» — тип, ҡытыҡлап, муйынынан ышҡыйҙар. Зыҡ ҡубып көлөшәләр. Ҡоромға буялғандар көләләр, уларҙың үҙҙәренә ҡарап башҡалар көлә. Уйындың бар булған мәрәкәһе шул.

V. Ололарҙың уйындары

Бабайҙар уйындары

72. *Ҡарттар уйыны.*

Был уйында өлкән йәштәге бабайҙар ғына ҡатнаша. Таш ырғытыпмы, шыбаға тотопмо кем теүәтәйенән* башларға билдәләйҙәр. Шул бабай теүәтәйен үҙ ҡулы менән ергә һала. Уйнаусы бабайҙар һанашыу юлы менән беренсе бабай, икенсе бабай, өсөнсө бабай (күпме бабай уйнаһа, шунса һан була инде) тип, бабайҙарға һан—исем ҡушып сығалар. Ҡаршы яҡҡа 30—40 аҙымдан һыҙыҡ һыҙалар. Беренсе бабай уйынды башлап ебәрә, йәғни теүәтәйҙе һыҙыҡ яғына тибеп алып китә. Теүәтәй хужаһы бабай теүәтәйен тегенән һалдырып алырға тырыша. Теүәтәйен һалдырып ала алмаһа, икенсе бабай тибеп алып китә. Әгәр теүәтәй хужаһы был юлы һалдырып ала алһа, икенсе бабай үҙенең теүәтәйен һала. Тирәләп халыҡ ҡарап тора, һәр яҡ, һәр кем үҙ бабайына көс биреп тора.

73. *Теүәтәй алыш (вариант).*

Әйтәйек, ун биш кеше уйнай. Ун биш кеше һыйырлыҡ дүрткел һыҙыҡ һыҙалар. Шыбаға менән килешеп, уйын башлыҡтары кем тышта, кем эстә булыуын билдәләй. Өҫкә сыҡҡан башлыҡ тышта була. Тыштағылар эстәгеләрҙең теүәтәйҙәрен эләктереп ҡасырға тырышалар. Эстәгеләр «тотҡон» булып һаналалар. Тыштағылар теүәтәйҙе алып һыҙыҡҡа табан йүгерҙе ти, эстәгеләр барыһы ла теүәтәйҙе алып ҡасҡан тыштағы уйынсыға ташлана, әгәр һыҙыҡҡа тиклем тотһалар, тотҡонлоҡтан ҡотолалар, тыштағылар эскә керә. Әгәр тота алмаһалар, уйын артабан дауам итә.

---

* Түбәтәй (Ҡара: БТҺ, II т., 318-се бит)

Әбейҙәр уйыны*

74. *Ҡоҙағыйҙар уйыны.*

Бик боронғо заман уйыны. Ҡоҙағыйҙар ҡарға туйы яһайҙар. Бында тик әбейҙәр генә була. Ошо уйында ҡоҙағыйҙар йүгерешәләр, көрәшәләр. Еңгән ҡоҙағыйға бүләктәр бирәләр.

---

* *Бер генә* уйын булһа ла, айырым бүлек итеп бирҙек. Моғайын, халыҡта улар күберәк булғандыр. Мәҫәлән, әбейҙәр сыуағы. Юҡҡа ғына ул байрам шулай аталмағандыр бит. Киләсәктә бәлки был төркөмгә уйындар өҫтәлер, тигән өмөттәбеҙ.

ИҪКӘРМӘЛӘР

I. Балалар уйындары

Ҡыҙҙар менән малайҙар уйындары

1 (8)* *Уҙамаплашыу* (уҙаҡлашыу).

Әлшәй районының Ташлы ауылында Монасипов Минсабир Мөсәғит улынан (1918) яҙып алынған. Текст ҡулдан яҙылған.

Ике тигеҙ төркөмгә бүленеп уйнай торған уйындың башы. Бындай уйындар башҡорт халыҡ ижадында ҙур ғына урын ала. Беҙҙең яҡта (Учалы районында — *Х.Г.*), мәҫәлән, йәшкә олораҡ, абруйлыраҡ ике баланы «атай» итеп һайлай инек. Улар икеһе бергә торалар, ә ҡалғандар парлашып, үҙ-ара исем билдәләйҙәр ҙә килеп «атай»ҙан һорайҙар. Мәҫ., аймы, ҡояшмы. «Атай»ҙар алмаш-тилмәш үҙҙәренә оҡшаған исемде әйтеп, һәр береһе үҙенә төркөм туплай. Уйнаусылар шундай ысул менән ике тигеҙ төркөмгә бүленгәс, төп уйын башлана ине. Ҡайһы осраҡта йә «атай»ға уйынсылар төркөмө оҡшамай, йә икенсе сәбәп менән ошо этапта туҡталып, артабан уйындан баш тартып ҡуйған осраҡтар ҙа була.

2 (2, м)**. *Әйтеш уйыны.*

Салауат районы Иҙелбай 8 йыллыҡ мәктәбе фольклор түңәрәге ағзалары (етәксеһе Зануфа Ғәрифуллина) төҙөгән альбомдан күсереп алынған. Уйын 1968 йылда 60 йәшлек Ғәрифә Ғәйнуллинанан яҙып алынған булған. Ҡулъяҙмаға машинкала баҫылған текст беркетеп ҡуйылған.

---

* *Йәйә* эсендә уйындың Н.Д. Шоңҡаров ҡулъяҙмаһындағы рәт һаны күрһәтелде.

** *«м» хәрефе* ҡулъяҙмала машинкала баҫылған текст булыуын белдерә.

Йөкмәткеһенә ҡарағанда уйында ҡыҙҙар ҙа, малайҙар ҙа бергә уйнай алған. Күрәһең, ике төркөмгә бүленеп, тәүҙә беренсе төркөмдән (кем тәүҙә һорау бирәсәген «атай»ҙар, моғайын, шыбаға тотоношоп билдәләгәндәрҙер) сиратлап, йәғни беренсе төркөмдән беренсе уйынсы һорау бирә, икенсе төркөмдән кемдер яуап бирә. Уйын йә төркөмдәрҙең алмаш-тилмәш һорау-яуап биреүенә ҡоролған, йә ҡайһы төркөм уйынсылары йә һорау, йә яуап тапмағанда, ролдәрҙе алмашыуға ҡоролған булырға тейеш.

3 (7). *Убыр әбей.*

Паспорты юҡ. Н. Шоңҡаровтың ҡулы менән текст аҙағында «Был уйындың көйө бар, нотаһы бар», — тип яҙып ҡуйылған. Текст ҡулдан яҙылған.

4 (9). *Сыҙма туп.*

1958 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Монасипов Минсабир Мөсәғит улынан (1918) яҙып алынған. Текст ҡулдан яҙылған, һүрәт төшөрөп аңлатылған.

4.1*. (11). *Сыҙма туп.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһе хәҙерге Красногвардейский районының Тәңес ауылында Боранғолов Минеғол Ғәлиулла улынан (1887) 1960 й. яҙып алынған. Текст ҡулдан яҙылған. Алдағы уйындың үтә ҡыҫҡа варианты. Ошо уҡ райондың Бәвет ауылында Байков Ғөбәйҙулла Тимербулат улынан (65 йәш) яҙып алынған вариант бер генә һөйләмдән тора: «Сыҙма туп: һәр кешенең билгеләнгән соҡоро була. Кемдең соҡорона төшһә, шул алып бәрә». Бында һүҙ «Соҡор туп» уйыны тураһында булырға тейеш.

4.2. (12). *Һыҙма туп.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр районының Кәнсер ауылында Яушев Зөфәр Тимербулат улынан (1936) яҙып алынған. Текст ҡулдан яҙылған. Нигеҙҙә 4.1.-се уйынды ҡабатлай.

4.3. (14). *Сыҙыҡ туп.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр районының Аҡтин ауылында Агишев Фазулла Сафагәрәй улынан (1906) яҙып алынған. Текст ҡулдан яҙылған.

Шулай уҡ 4, 4.1., 4.2. уйындарҙың варианты. Бер үк уйын бер үк өлкәлә яҙып алынған. Яҙып алыу рәүеше менән айырылалар. Тәүгеһе тулыраҡ, ҡалғандары ҡыҫҡа.

---

* *Рәт* һаны нөктә аша, 1, 2 һ.б. һандар менән бирелеүен уйындың варианттары тип аңларға кәрәк.

4.4. (18). *Сыҙма туп.*

Ырымбур өлкәһе Люксембург (хәҙерге Красногвардейский) районы Бәвет ауылында Байков Ғөбәйҙулла Тимербулат улынан (65 йәш) яҙып алынған.

5. *Сәпәмә туп.*

1959 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Әхмәтов Шәйҙулла Үзбәк улынан (1920) яҙып алынған һәм: «Был уйын урыҫтарҙың «Лапта» уйынына оҡшаған. Яҙыусы А.И. Куприн «Лапта» уйынын бик яратып уйнар булған, хатта 1916 йылда «Геркулес» журналында ошо уйынды баҫтырып та сығарған», — тигән иҫкәрмә яһаған. Текст ҡулдан яҙылған.

5.1. (11). *Туп ҡағыш.*

Учалы районының Оҙонгүл ауылы Мөхәмәҙиев Йомабайҙан (70 йәш), Суфиянов Әхмәтйән Әүхәҙи улынан (30 й.), Ямашов Хафиз Ямалетдин улынан (60 й.) яҙып алған мәғлүмәт. Бер генә һөйләмдән тора. Машинкала баҫылған. Өҫтәге уйын кеүек үк уйнала, исеме генә башҡа.

6. (20, м). *Мөйөш.*

1968 йылда Архангель районының Әйтмәмбәт ауылынан Гөлмәрйәм Әбхәлимова «Башҡортостан ҡыҙы» (1968, № 10, 18-се бит) журналына яҙып ебәргән. Н. Шоңҡаров уны журнал битенән киҫеп алып, ҡулъяҙмаһына йәбештереп ҡуйған.

7. (30). *Боҙоҡ телефон.* 8. (31, м). *Еңеү.* 9. (32). *Ҡалды.*

Был уйындарҙы Н.Шоңҡаров «Башҡортостан ҡыҙы» (1968, №12, 18-19 бит) журналынан киҫеп алып, ҡулъяҙмаһына йәбештереп ҡуйған. Ғафури районының Ҡарағай ауылы Мәүлит Йомағолов «Балалар уйындары» рубрикаһына яҙып ебәргән. «Боҙоҡ телефон» уйынын балалар ғына түгел, йәштәр ҙә яратып уйнай.

10. (37). *Йәшенмәк-затиликом.*

Әлшәй районының Ташлы ауылынан Шоңҡаров Нигмәт Диниәхмәт улы (1931), үҙе яҙыуынса, бәләкәй саҡта уйнаған уйын. Текст ҡулдан яҙылған.

10.1. (15, м). *Көрөлдәк.*

Учалы районы Оҙонкүл ауылы Мөхәмәҙиев Йомабайҙан (70 йәш), Суфиянов Әхмәтйән Әүхәҙи улынан (30 й.), Ямашов Хафиз Ямалетдин улынан (60 й.) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

10.2. (22). Йәшенмеш.

Бөрйән районының Мәҡсүт ауылы Галин Сәйфулла Ибәтулла улынан (83 йәштә) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

11.а. *Тауҙан шыуыу.* Информатор шул уҡ (10.2.)

11. б. *Ырғымыш.*

1967 йылда Йылайыр районының Мәксүт ауылында Бикбулатова Сәлихә Ҡорманғәле ҡыҙынан (1904) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

Малайҙар уйындары

12. (3, м) *Ҡарсыға.*

1967 йылдың июнь айында Хәйбулла районының Әбеш ауылында Хәсәнов Дәүләтғәлим Әхмәткирәй улынан (74йәштә) яҙып алған. Ҡулъяҙмаға машинкала баҫылған текст беркетеп ҡуйылған. Информатор тағы шундай мәғлүмәт биргән: «Билге уйыны», «Бура» уйындары булды. Элек шул уйындар етеҙлек ярышы булды, хәҙер ни улай уйнамайҙар. Әлеге көн китеп барһам, 5—6 малай арбаҙ (аҙбар — *Х.Г.*) ҡырында торалар.

— Нишләп былай тораһығыҙ, — тип һораным.

— Пленныйҙар һаҡлайбыҙ, — тиҙәр, ҡулдарына осло таяҡтар тотҡандар.

Миңә ҡалһа, был уйында ҡыҙҙар ҙа ҡатнаша алғандыр. Информатор ир кеше булғанға ғына малайҙар тип әйтмәнеме икән?

13. (30). *Һапҡын уйыны.*

1960 йылда Биләрет (Белорецк — *Х.Г.*) районының Ҡоҙғон Әхмәр ауылында Сәйфелмөлөк бабайҙан яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

14. (28). *Туплы уйыны.*

1962 йылдың 5 октябрендә Өфө ҡалаһында Татарстандың Баулы районы Баулы ауылынан килгән Вәхитов Хәмзә Камалетдин улынан (1889) яҙып алған һәм: «Х.К. Вәхитов милләте яғынан башҡорт» тигән иҫкәрмә яһаған. Текст ҡулдан яҙылған.

15. (16). *Туп һуғыу.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Новосергеевка районының Мрәҫ ауылында Аюкасов Рәүеф Ғимран улынан (1902) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

«Туп һуғыу» «шар һуғыу» уйыны кеүек.

Ҡулъяҙмала «туҡтата алмаһалар» тигән урынды «туҡтата алһалар» тип бирҙек. Шулай дөрөҫөрәк тойолдо.

15.1. (17). *Туп уйыны.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр районының Аҡтин ауылында Агишев Фазулла Сафагәрәй улынан (1906) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

Нигеҙҙә шул уҡ 15-се уйын.

16. (26). *Ҡусәй һуғыу*[*].

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Новосергеевка районының Мрәҫ ауылында Сөләймәнов Төхфәт Шәмсетдин улынан (1910) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

16.1. (26). *Ҡусә һуғыу* (вариант).

Шул уҡ информатор (текст № 15). Текст машинкала баҫылған. Ҡулдан яҙылғаны ла, машинкала баҫылғаны ла 26-сы һанға тура килгән.

16.2. *Сөрәкә.*

Әбйәлил районында Мөғәлим Мирхәйҙәровтан (60 йәш) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған, № 7 алдынан номерһыҙ бирелгән.

16.3. *Себен.*

Учалы районы Оҙонгүл ауылы Мөхәмәҙиев Йомабайҙан (70 йәш), Суфиянов Әхмәтйән Әүхәҙи улынан (30 й.), Ямашов Хафиз Ямалетдин улынан (60 й.) яҙып алған. Ике һөйләмдән генә торған мәғлүмәт машинкала баҫылған, № 15-тән һуң килә, рәт һаны бирелмәгән.

16.4. *Сүрәкә.*

Бөрйән районының Мәҡсүт ауылында Галин Сәйфулла Ибәтулла улынан (83 йәштә) яҙып алған. Ике һөйләмдән торған был мәғлүмәт машинкала баҫылған. № 22, м менән ҡушылып бирелгән. Айырым рәт һаны юҡ.

17. (25). *Мөғләй.*

1959 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Әхмәтов Шәйҙулла Үзбәк улынан (1920) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

18. (20). *Ашыҡ сағыу.*

1962 йылда Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Сүрәк ауылында Кәфилов Нәбиулланан (1902) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

19. (19). *Шар һуғыу.* Информатор шул уҡ (текст 18).

19.1. *Шар уйыны.*

Учалы районы Оҙонгүл ауылы Мөхәмәҙиев Йомабайҙан (70 йәш), Суфиянов Әхмәтйән Әүхәҙи улынан (30 й.), Ямашов Хафиз Ямалетдин улынан (60 й.) яҙып алған. Рәт һаны күрһәтелмәгән. № 11, м-дән һуң килә.

---

[*] *Уйындың* биш варианты бирелә: 16—16.4.

20. (15). *Шар һуғыу.*

1958 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Монасипов Минсабир Мөсәғит улынан (1918) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған. Уйын ҡоралдарының (ҡаҡма, кәшәкә, арҡылыбаш) һүрәттәре эшләнгән. Был уйындың исеме алдағы уйындыҡы менән тап килһә лә, бөтөнләй икенсе уйын.

21. (11). *Жөжөк уйыны.* 22. (12, м). *Сиртмеш.* 23. (13, м). *Теүәтәй йәшереш.* 24. (14, м). *Бура.* 25. (15, м-дән һуң, рәт һаны юҡ)

Учалы районы Оҙонгүл ауылы Мөхәмәҙиев Йомабайҙан (70 йәш) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

26. (17, м). *Ҡузна бәреү*, 27 (18м). *Вәзит һугыу*).

Ырымбур өлкәһенең хәҙерге Красногвардейский районы Бәвет ауылы Байков Ғөбәйдулла Тимербулат улынан (65 йәш) яҙып алған. Текстар машинкала баҫылған.

28.а. (4, м). *Һаҡыш уйыны.*

1967 йылда Йылайыр районының Мәҡсүт ауылында Бикбулатова Сәлихә Ҡорманғәле ҡыҙынан (1904) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

28. (23, м). *Һаҡыташ* (вариант), рәт һаны юҡ, 24, м-дән алда. 29. *Туп һуғышыу.* 30. (24, м). *Сәкән.*

1960 йылда Бөрйән районының Мәҡсүт ауылында Галин Сәйфулла Ибәтулла улынан (83 йәштә) яҙып алған. Текстар машинкала баҫылған.

31. (36). *Йөрөткөс уйыны.*

Ниғмәт Шонҡаров иҫенә төшөрөп, үҙе 1988 йылдың 10 ноябрендә яҙып ҡуйған, тип аңларға кәрәк. Текст ҡулдан яҙылған һәм: «Был уйын һуғыш йылдарында үҫкән малайҙар уйыны. Ул саҡтарҙа магазиндарҙа бер төрлө лә уйынсыҡ юҡ ине», — тигән иҫкәрмә яһалған.

32. (38). *Таҡта тибеш.*

Ниғмәт Шонҡаров иҫенә төшөрөп, үҙе 1988 йылдың 11 ноябрендә яҙып ҡуйған, тип аңларға кәрәк. Текст ҡулдан яҙылған.

Ҡыҙҙар уйындары

33. (18). *Соҡор туп.*

1960 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Әхмәтова Тәскирә Мөсәғит ҡыҙынан (1925) яҙып алған. «Информатор был уйынды — ҡыҙҙар уйыны ти», тигән иҫкәрмә яһаған. Текст ҡулдан яҙылған.

34. (44). Өмә уйыны босмаҡлы. 1964 йылда Дәүләкән районының Мәкәш ауылында Солтанова Сабиранан (1895) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

35. (48). Әбәк-төбәк. 1960 йылда Бөрйән районының Мәҡсүт ауылында Галин Сәйфулла Ибәтулла улынан (1877) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

36. (34). Әбәк 1959 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Шонҡарова Нәсихәнән (1913) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

37. (49). Әбәк-көбәк. 1965 йылда Баймаҡ районының II Этҡол ауылында Шәһәрғәзе Ғәбдиевтан (1895-1970) яҙып алған.

38. (35). Һуҡыр тәкә. 1960 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Билалова Сәлимә Тимербулат ҡыҙынан (1927) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

II. Йәштәр уйындары

Ҡыҙҙар менән егеттәр уйындары

39. (1). *Таштуғай.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр районының Ҡайыпҡол ауылында (Иҫәнғол — *Н.Ш.*) Абдразаҡов Миңнебулат Тимербулат улынан (1892) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған. Уйын тексының аҙағында түбәндәге мәғлүмәт өҫтәлгән: 1920 йылдарға тиклем Таштуғай уйыны шәп уйналған. Ивановка районы Ҡабаҡ ауылы эргәһендәге уба янына Туҡ буйының бөтә ауылдары йыйылыр булған. Уйындар тамамланғас, кис булғас, ҡунаҡ ауылға (бер тәғәйенләнгән ауыл) килеп ҡунаҡ булалар. Икенсе көндө лә төрлө уйындар дауам итә. Икенсе йылын, тап шул ваҡыт, 15 майҙа, уйын яңынан башланып китә. Миңнебулат Абдразаҡов 1900 йылда ошо ауылда мәҙрәсәлә уҡый, Зариф мулла уҡыта. Биш йыл уҡығас, 1905 йылда Туҡайға китә, был өс мәсетле ауыл була. Туҡайҙа яңы ысул менән уҡыталар. 1907 йылда Ҡарғалыға китә, шунда 1910 йылға тиклем уҡый.

40. (42). *Әмбәл-дөмбәл.*

1965 йылда Баймаҡ районының II Этҡол ауылында Шәһәрғәзе Ғәбдиевтан (1895-1970) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

41. (27). *Күрешеү;* 42.(28). *Үгеҙ-йөҙөк.*

1968 йылда Архангель районының Әйтмәмбәт ауылында йәшәүсе Гөлмәрйәм Әбхәлимова «Башҡортостан ҡыҙы» (1968, № 10, 18-се бит) журналына яҙып ебәргән. Н.Шонҡаров уны

журнал битенән киҫеп алып, ҡулъяҙмаһына йәбештереп ҡуйған.

43. (23). *Һәүәнәй әбей.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһенең Күрпәс ауылында Булатов Мөнир Әсәдулла улынан (1936) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

44. (24). *Үгеҙ уйыны.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһенең Ҡотош ауылында Гайсин Бәхти Сафиулла улынан (1886) Бөрйән ырыуы; Ҡара яр ауылында Татлыбаева Хәбибәнән (1912) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

45. (31). *Йондоҙ һанау.*

1959 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Әхмәтов Шәйҙулла Үзбәк улынан (1920) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

46. (32). *Татыулыҡ.*

1959 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Шиһапова Мәҙинә Миңлеәхмәт ҡыҙынан (1930) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

47. (46). *Ҡоҙаса сәйе уйыны.*

1965 йылда Баймаҡ районының II Этҡол ауылында Шәһәрғәзе Ғәбдиевтан (1895—1970) Ниғмәт Шоңҡаров яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

48. (47). *Тырпыса уйыны.*

1960 йылда Бөрйән районының Аралбай ауылында Вәлиева Фатима Сәмсетдин ҡыҙынан (1908) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

49. (48). *Һаҡыташ уйыны.*

1960 йылда Бөрйән районының Мәҡсүт ауылында Галин Сәйфулла Ибәтулла улынан (1877) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

50. (50). *Һаба йыйыу уйыны.*

1965 йылда Баймаҡ районының II Этҡол ауылында Шәһәрғәзе Ғәбдиевтан (1895—1970) яҙып алған.

51. (51). *Ҡаҙыҡ уйыны;* 52. (52). *Серләшеү.*

1988 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылынан (хәҙер Өфөлә йәшәй — *Н.Ш.*) Ҡолдәүләтова Сәлимә Тимербулат ҡыҙынан (1928) яҙып алған. Текстар ҡулдан яҙылған.

53. (15м). *Билмау йәшереү.*

Учалы районы Оҙонгүл ауылы Мөхәмәҙиев Йомабайҙан (70 йәш), Суфиянов Әхмәтйән Әүхәҙи улынан (30 й.), Ямашов

Хафиз Ямалетдин улынан (60 й.) яҙып алған мәғлүмәт. Бер генә һөйләмдән тора. Машинкала баҫылған.

Малайҙар уйындары

54. (21, м). *Аҡ тирәк* (вариант).

Ырымбур өлкәһе Красногвардейский районының Ғәбдерафиҡ (Яңауыл) ауылында Байтимеров Әхмәтғәли Рамазан улынан (46 йәштә) яҙып алған. Информатор шулай уҡ ауылда «Сәкән һуғыу», «Саҡ бәрешеү», «Һыҙма туп» уйындары булыуы тураһында билдәләп үткән. Текст машинкала баҫылған.

55. (13). *Аҡ тирәк* (вариант).

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр районының Ҡайыпҡол ауылында Абдразаҡов Минебулат Тимербулат улынан (1892) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

Ырымбур өлкәһендә «Аҡ тирәк» уйыны, йөкмәткеһенә ҡарағанда, малайҙар уйыны булырға тейеш. Йылайыр районында иһә, ул ҡыҙҙар уйыны һанала һәм билгә тиклем сисенеү элементы юҡ. (ҡара № 59).

Ҡыҙҙар уйындары

56. (40). Бәхет һынау уйыны.

1988 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылынан (хәҙер Өфөлә йәшәй) Ҡолдәүләтова Сәлимә Тимербулат ҡыҙынан (1928) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

57. (19, м). *Тартышмаҡ.*; 58. (20, м). *Күмер йөҙөк.*

Ырымбур өлкәһенең Ҡайыпҡол ауылында Абдразаҡов Миңнебулат Тимербулат улынан (1892 йыл) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

59. (4, м). Аҡ тирәк.

1967 йылда Йылайыр районының Мәҡсүт ауылында Бикбулатова Сәлихә Ҡорманғәле ҡыҙынан (1904) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

III. Ир-егеттәрҙең уйындары

60. (10). *Мәләкүт.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһенең Ҡайыпҡол ауылында Абдразаҡов Минебулат Тимербулат улынан (1892) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

61. (33). *Һал-һал, һалһаң да асыуланмайым.*

1958 йылда Әлшәй районының Ташлы ауылында Шоңҡарова Нәсихә Самат ҡыҙынан (1913) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

62. (29). *Таҡыя типкес* («Бертеүеш»).

1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр районының Аҡтин ауылында Агишев Фазулла Сафагәрәй улынан (1906) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

63. (5, м). *Шар уйнау уйыны*; 64. (6, м) *Соҡор уйыны*; 65 (рәт һаны юҡ). *Сәкән.*

Әбйәлил районында (йылы, ауылы күрһәтелмәгән — *Х.Г.*) Мөғәллим Мирхәйҙәровтан яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

66. (16, м). *Билге тибеү.*

Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Ялтыр ауылында Ғәниев Аллаярҙан (80 йәш) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған һәм информаторҙың: «Туп һуғыу», башҡа яҡта уйнаған кеүек «Шаран* һуғыу» уйыны бар», — тигән мәғлүмәте теркәлгән.

67. (7, м). *Билге*; 68 (8, м) *Атҡыя.*

Әбйәлил районында (йылы, ауылы күрһәтелмәгән — *Х.Г.*) Мөғәллим Мирхәйҙәровтан яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

IV. Ҡатын-ҡыҙҙар менән балаларҙың уйындары

69 (3). *Ҡарға бутҡаһы.*

1960 йылда Бөрйән районының Ҡотан ауылында Ғәҙелшин Ғәлиҙән (1901) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

69.а. (4). *Ҡарға бутҡаһы.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһенең Новосергеевка районының Әхмәр ауылында Итколова Сәғиҙә Мөхәмәткирәй ҡыҙынан (1903) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

---

* *Шар һуғыу* булырға тейеш. Һүҙлектә: егеттәр, ир балалар уйыны (уйнаусылар һуғыусы һәм көтөүселәргә бүленә; көтөүселәрҙең береһе шарҙы юғары ырғытырға, һуғыусыларҙан берәү таяҡ менән уны һуғырға тейеш. Уйындың отошо ошо уйын ҡоралдарының билдәләнгән урынға килтереп еткерелеүенә бәйле. (Ҡара: БТҺ, II том, 649-сы бит).

69.б. (5). Ҡарға бутҡаһы.

1960 йылда Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районының Ғәбдрәфиҡ ауылында Биҡколов Әсәдулланан (1878) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

69.в. (2). *Ҡарға бутҡаһы.*

1960 йылда Ырымбур өлкәһенең Александр районының Ҡайыпҡол ауылында Абдразаҡов Миңнебай Тимербулат улынан (1892) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

69.г. (6). *Ҡарға бутҡаһы.*

1960 йылда Бөрйән районының Шүлгән ауылында Сафина Хәбибьямалдан (1888) яҙып алған. Текст машинкала баҫылған.

70. (45). *Ҡымыҙ ҙа бар, бал да бар.* 71. (43). *Үгеҙ йөҙөк.*

1965 йылда Баймаҡ районының II Этҡол ауылында Шәһәрғәзе Ғәбдиевтан (1895—1970) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған. Был уйын, йөкмәткеһенән күренеүенсә, «Ҡарға бутҡаһы»нда уйналған.

V. Ололарҙың уйындары

Бабайҙарҙың уйындары

72. (22). *Ҡарттар уйыны.*

1962 йылда Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районының Ғәшер ауылында Әхмәтов Мөхәммәт Абдрахман улынан (тыуған йылы күрһәтелмәгән — Х.Г.) яҙып алған.

72.а. (27). *Теүәтәй алыш.*

1962 йылда Өфөлә Татарстандың Баулы районы Баулы ауылынан килгән Вәхитов Хәмзә Камалетдин улынан (1889), милләте яғынан башҡорт, яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

Әбейҙәр уйыны

73. (21). *Ҡоҙағыйҙар уйыны.*

1962 йылда Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ғәшер ауылында Әхмәтов Мөхәммәт Абдрахман улынан (тыуған йылын яҙырға онотолған — *Н.Ш.*) яҙып алған. Текст ҡулдан яҙылған.

ҠУШЫМТА

«СЫҢРАУ ТОРНА» БЕЙЕҮЕНЕҢ ҠАЙҺЫ БЕР ЭЛЕМЕНТТАРЫ

«...Уртала һәр ваҡыт бер кеше бейей. Ярым түңәрәктә тороусылар ҡул һуғыу һәм ҡулда бармаҡҡа беркетелгән ағастар менән бейеүсегә дәрт бирә. Был ағастар торнаның суҡыштары менән ауыҙ асыу-ябыуын күрһәтергә тейеш.

Урталағы «вожак» тәүҙә бик тыныс ҡына түңәрәк тирәләй ҡанатын йәйгән килеш йөрөштөрә. Унан «Сыңрау торна» көйөн ҡурайҙа уйнауҙы көслөрәк тауыш менән көйләй, шул көйгә ҡул сабыу, ағастар менән уйнау башлана. «Вожак» ҡанатын йәйгән килеш, ҡанат остарын бик матур һелкендереп, үҙе бер аҙ эйелә биреп, талпынып бейей башлай. Бейей башлағанда уҡ ҡанаттың бер яғы аҫҡараҡ, береһе өҫкәрәк тотолорға тейеш. Бейеүселәр ярым аҙымдар менән аяҡ остарында хәрәкәт итә. Унан һуң ул ярым түңәрәктең тап уртаһында өйөрөлә, өйөрөлгәндә баштар, яуырындар, ҡулдар, бил, тубыҡтар, аяҡ остары тулы хәрәкәттә була. Шул ваҡытта уның хәрәкәт итеү төрҙәре лә үҙгәрә, аяҡты бер аҙ ситкә лә һелкеп ала, бер аҙ ике үксәне лә ҡаға. Бөтә хәрәкәттә лә ҡанат төрлө хәрәкәткә үҙгәреп тора: йә тигеҙ, йә ҡыя, йә аҫҡа-өҫкә төшөп тора...»

Әбйәлил районының Ҡусҡар ауылынан Мамлеева Гөлнур Хәйбулла ҡыҙынан (1931 й.т., уҡытыусы) 1989 йылда яҙып алынған (21.11.1989).

Хикәйә «Ҡыҙыл алма» («Ярым алма»)

Борон үлгән әҙәмдин,
Пәйғәмбәрнең сунындин,
Бер ир чыкты Ҡуфадин,
Аты Ноғман ир диә.

Яратты ул пәриүәр,
Ярлыкар аны «Яппар»,
Шәжрәдә иде үзе,
Аты Сабит ир диә.
Арыкта сыу бар ирде,
Сабит тәһәрәт кылды,
Сыу берлә кызыл алма
Ағып барыр ир диә.
Сабит алманы күрде,
Сыудин кулына алды,
Ярымын ейеп ирде,
Күңелендән ир диә.
Нигә ейдем яртысын,
Тапсам ирде эйәсен,
Бирсәм ирде баһасын,
Табиян куркып тор диә.
Ярымын кулға алды,
Чарбакларны кыдырды,
Килеп чарбакка керде,
Бер ир карши кил диә.
Сәләм бирде бу егет,
Ошбу егетне күргәч,
Кулындағы алманы
Безнеке дип, ал диә.
Бу алманы алып сән,
Бездән рөхсәт алмайсән,
Ахирәттә язасын
Хуп бирерсең, ти диә.
Егет әйди килеп мән,
Сезне әстәп йөрөрмән,
Ахирәттән курккандин,
Хәзер биргем, ти диә.
Ул ир егетне күрде.
Ғәбит ирдекен белде,
Бер кызы һәм бар ирде
Сахипъямал ир диә.
Бер сүзем бар,
Өйөмдә бер кызым бар,
Ошбу кызымны алсаң,
Кичерәйен, ти диә.

Сөйләгәлей теле юҡ,
Күргәлей һәм күзе юҡ,
Аяғы һәм ҡулы юҡ,
Ҡызым мындағы, ти диә.
Бу ҡызымны алмасаң,
Мине риза ҡылмасаң,
Ярым алма язасын
Синдин алғын, ти диә.
Алай дисә ҡызыны,
Алып нә ҡылсын аны.
Ярым алма ейгәндин
Ғилаж тапмай, тор диә.
Сүзләгәлей теле юҡ,
Булса күрер күзе юҡ,
Миңә мөшкөл булды дип,
Сүзең ҡабул ҡыл, диә.
Сүзен ҡабул ҡылмасам,
Бу ҡызыны алмасам,
Әхирәттә язасын,
Нә ҡылайын, ти диә.
Һәр нә булса булайын,
Ҡызыны һәм алайын,
Әхирәт газабындин
Ҡортолайын, ти диә.
Ҡабул ҡылди сүзени,
Алмаҡ булды ҡызын,
Ҡиәмәтнең язасын
Монда тарҡай, ти диә.
Хуш ваҡыт, булды атасы,
Рази булды анасы,
Туйлар ҡылып, һәм никах
Ул сәғәттә булдиә.
Хатынлар йыйналдылар,
Өйгә түшәп салдылар,
Ҡызны алып килделәр,
Ошбу егет күр диә.
Күргәч, ани сискәнде,
Ҡачып тышҡара чыкты,
Үзгә ҡызни китереп,
Мәзәк ҡылырсыз, ти диә.

Әйтер егет ни диерсез,
Безне мәзәх итәрсез,
Безгә дигән ҡызыңыз
Бу имәстер, ти диә.
Хатынлар күп килделәр,
Ҡаһ ороп көлделәр,
Ошбу ирер ҡызымыз
Безгә инан, ти диә.
Ағызы дисәң ағызы бар,
Күзе дисәң күзе бар,
Аят хәдис сүзе бар,
Мындағы ирер, ти диә.
Егет күрде ҡызыны,
Төртсә күрде йөзөне,
Ялғанчыдыр атасы,
Ҡызын алмам, ти диә.
Килде ҡызның атасы,
Юҡтыр сүзем хатасы,
Ата берлән анасы
Килеп ғөзөр ҡыл диә.
Теле юҡтыр дигәнем
Фасих сүзне әйтмәде.
Хаҡ Ядыны ҡуймады,
Телдин мәдәм, ти диә.
Күзе юҡтыр дигәнем,
Нәмәхәрәмне күрмәде
Хафиз Ҡөрьәндин үзгә
Надыр ҡылмас, ти диә.
Аяғы юҡ дигәнем-
Яман әшкә йөрмәде.
Ишет имде бу сүзне
Ая фәрдән, ти диә.
Егет бу сүзне ишетте.
Серне күңелендә тапты.
Бу сүз егет күңелендә
Андағы мәғбүл бул диә.
Егет ҡызға ҡушылды,
Йебәк булып ишелде.
Күңелләре тынүбән
Әрәм ҡара ҡылдиә.

Ничә көнләр үтеп тор,
Ҡыз хәмлә булып тор,
Эчендәге хәмләсе
Бер ир уғлан бул диә.
Уғлан алты йәшәде,
Аны мәктәпкә бирде,
Һәр көндә мулласыға
Уҡып килер ир диә.
Бер падишаһ бар ирде,
Иш бу шәһәрдә ирде,
Падишаһ Һудә ханымға
Мәзәх тәки ҡыл диә.
Ҡызыл берлә сүзләде,
Бер заман уҡ уйнады,
Ханым әйде падишаһға
Син йәһәннәми, ти диә.
Падишаһ әйтер нә дирсең,
Сүзне белмәй сөйләрсән,
Мин йәһәннәми булсам,
Син талаҡ бул, ти диә.
Муллаларны йыйдылар,
Риүәйәт бармы, ти диә,
Өч көнгәчә тапмасаң,
Улар серләр, ти диә.
Серне галим йалға билгади
Гонаһлары *бәрәбәр** ҡылды,
Риүәйәтне тапмасаң,
*Йығланырлар*** ир диә.
Ноғман остадин сорады,
Нигә йығларсыз, ти ди,
Мулла әйди: Әй, уғлан!
Тик утыр сән, ти диә.
Йәүә ҡайна йөрәди,
Меңә әйтмәсән, ти ди,
Өч көн булди *паришан****
Була тиер, ти диә.

бәрәбәр* — икәүһенә бер тигеҙ гонаһ; ** йығланырлар — иларҙар ғына; ** паришан — харап булыу, емерелеү.*

Ханым ханға *илтеп** тер,
Йәһәннәми сән, диеп тор,
Мән йәһәннәми булсам,
Сән талаҡ бул, ти диә.

*Монча-монча*** йыгларсыз,
Бәне ханха илтегез,
Ошбу сүзнең яуабын,
Мин бирермен, ти диә.

Әйҙи мулла барайын,
Ғалимләргә илтәйен,
Бу сузене ғалимләр
Хуш күрерләр, ти диә.

Мулла барди ғалим килде,
Уғланға уғлан безләргә,
Дәүләт шат булғай, ти диә.

Бу уғланы алдылар,
Алыт ханға бардылар,
Ғалимләргә хан иде:
Тапмадығызмы, ти диә.

Бу уғланны падишаһ
Алып сезгә кәлипбез.
Ошбу уғлан риүәйәт
Мән бирермен, ти диә.

Падишаһ тәхетендә утырды,
Кечек угланны күрде,
Хан әйҙи: Әй, йәш уғлан!
Яуап биргел, ти диә.

Әйҙи уғлан ул заман:
«Тәхетендән төшкәл *рауан*!***
Тәхет өстөндә ултырып,
Яуап биргеш», ти диә.

Падишаһ тәхетендән төште,
Бу уғланны мендерде,
Мәстәлесен сорады,
Яуап биргел, ти диә.

---

* *Илтептер* — бәхәсләшәләр; ** *монча-монча* — был хәтле; *** *рауан* — тиҙерәк.

Ҡурҡамсыз, тәнредән,
Иман-гонаһи эшләрдин,
Ҡайнағу фиҙелендин
Тәбиғи уғлан сор диә.
Падишаһ әйҙи: Әй, бутам!
Бар ирде минем атам.
Атамның һәм ҡашында
Бер ҡызы бар ир диә.
Анам үдгән соң мән,
Бардым бер кичә аңа
Ҡыз әйҙи падишаһи
Бу эш ғәжәп, ти диә.
Ул кич аңа бардым,
Яуап аңа мин ҡылдым,
Ул кич бу фиғелемдин
Ҡайтып ирдем ир диә.
Вәннәзиғәт уҡыды,
Мәгнәсиде белдерде,
*Һәфтиәкне** ҡулындин
Алып аны күр диә.
Йәһәннәми син имәс,
Ханым һәм талаҡ булмас,
Бу аятның мәгнәсен
Мондағы торор, ти диә.
Гороһы-гороһы ғалимләр,
Хан янында ғәзимләр,
Хан ҡашында халайыҡлар
Таң гәжәйеп ҡалдылар.
Ошбу уғлан ир булыр,
Ил эчендә бер булыр,
Алты йәшәр уғланны
*Әгзәм*** булсын, ти диә.
Риүәйәттин белдерде,
Халыҡның күңелен тындырды,
*Имам әгзәм**** атлары
Ошбу ердә бул диә.

**Һәфтиәк* — ҡөрьәнден етенән бер өлөшөн эсенә алған китап; ***әгзәм* — ҙур дәрәжәле; ****Имам әгзәм* — дәрәжәле мулла.

Анасыға бардылар,
Чөйөнөчләр алдылар,
Алты йәшәр уғланығыз
Әғзәм булды, ти диә.

Яуап бирде анасы:
Ишетеңләр һәм, ти ди,
Минең улым өч йәшендә
Әғзәм булды, ти диә.

Сыудин алманы алды,
Бу рөхсәт ани ейде,
Ярым алма шомлоғы
Алты йәшкә килдиә.

Хаҡ фарманын тотоңыз,
Харам шөһбә еймыңез,
Кеше малын алмаңыз,
Тәбиән яуап бир диә.

Бөттө. Амин.

Был хикәйә-шиғырҙы әнейем Илбулдина Сафия Муллағәли ҡыҙы ғәрәп шрифенән һәм теленән перевод (тәржемә - Х.Г.) эшләне. Тексты яҙыусы һәм төҙөүсе Илбулдин Фәсхей Фәтхлислам улы.

Октябрь, 1980 й., Ейәнсура ауылы, Ҡыуандыҡ р-ны, Ырымбур өлкәһе.

Хикәйә «Исмәғил һәм ҡорбан булыу»

Диҙәр теләген йыҡмас,
Белгән ғүмерен сатмас,
Михнәткә йөзөн сытмас,
Йәнен фида ҡыл диә.

Ҡылды Ғаттас риүәйәт
Мосатафаның *лафзындин**,
*Сәхәбәләр*** иңрәшеп,
Күздә йәшләр чәчтиә.

Ул Ибраһим пәйғәмбәр
Күрде төшөндә *сәрүәр****,

---

* *Лафзындин* — бойроғондан; ** *сәхәбәләр*** — илселәр; *** *сәрүәр* — башлыҡ.

*Ярлыгы яды Яппар**
Ќорбан кәрәк, ти диә.
Хәлил ишарәт белде,
Йөз *дәүәне*** китертте,
*Минә тагына**** илтеп,
Ќөрбан ќылып кил диә.
Хаќтан фарман етелде,
Ябраилгә бар диде,
*Әйҙел**[4] Хәлил уғланы
Ќорбан ќығыл ди диә.
Ике сәүекле сыймас
Бер күңелдең эчендә,
Минең ризам теләсәң,
Йә, Исмәғил, ди диә.
Хәлил әйтер: Әй, *Кәрим*!*[5]
Серем белгеүче *Хаким**[6].
Углым ќорбан ќылайын,
Ќабул ќыйғыл, ти диә.
Хәлил өйүгә килде,
Исмәғил йөҙөн күрде,
Серен күңелендә тотто.
Ќупќыл Хәжәр*[7], ти диә.
Хәжәр ир ди анасы,
Ибраһимдыр атасы,
Ике йыһан *сафасы**[8],
Хуш Исмәғил ди диә.
Айә Хәжәр син ќупќыл,
Исмәғил башын йыуҙыл.
Сөрмә күзенә сипкел,
Дуска илтәй, ти диә.
Мескен Хәжәр белмәде,
Уғлы башын тарады,
Сөрмә күзенә сөртөп,
Сәчләрене үр диә.

**Ярлыгы яды Яппар* — ярлыќаусы Яппар (алланың бер исеме); ***дәүәне* — дөйәне; ****Минә тагына* — Минә тауына; **[4]әйҙел* — әйт; **[5]Кәрим* — алланың аты, ќушаматы; **[6]Хаким* — ќәҙерле исеме Алланың; **[7] ќупќыл* — тор; **[8] сафасы* — рәхәте.

Башын, күзен сыйпади,
Тажын башына ҡуйды,
*Ариғы** тунлар кейдерде
Алып аны кил диә.
Хәлил әчкәри керде,
Алмас бычаҡ, еп алды,
Ул бычаҡны *гизләбән***
Йәшерен алып чык диә.
Исмәғил *илкен**** тотто,
Мәккә шәһәрдин чыкты,
Ата-уғыл икесе
*Йөз япанга**[4] ҡуй диә.
Иблис бу әшне белде.
Эше-тышы ут булды,
Исмәғилне алдады,
Барма анда, ди диә.
Әйде Исмәғил яңғып,
Мөң бәндәмне алғыл,
Минә тағына бармағыл,
Ҡаның түгәр, ди диә.
Ҡанымны эш өчөн түгәр,
Бабам мине *хуш сәүәр**[5],
Дуслар йөзөне күргәне
Илтә торор, ди диә.
*Хаҡтин**[6] булып тор фарман
Сәни итәдер ҡорбан,
Миңә бычаҡ-еп алып,
Бара торыр, ти диә.
Исмәғил *назир**[7] ҡылды,
Иблис *идекен**[8] белде,
Ҡарамай ташны атты,
Ҡол аның мин, ди диә.
Ташны шайтанға атты,
Иблис йүгереп ҡачты,

---

* Ариғы — таза; ** *гизләбән* — үткерләп; *** *илкен* — ҡулын; *[4] *йөз япанга* — туп-тура ҡыр аша; *[5] *хуш сәүәр* — бик ярата; *[6] *хаҡтин* — Алланан; *[7] *назир* — ҡара; *[8] *идекен* — икәнен.

Мәлгүн сүзиз булмады,
Мәхрүм булып кит диә.
Ата-уғыл бардылар,
Тағы эченә керделәр,
Ҡорбан ерен күрделәр,
Заман ҡарар ҡыл диә.
Хәлил әйтер ян уғлан,
Хаҡтин булып тор фарман,
Сине ҡылырмын ҡорбан,
Ризаң *нәдер**, ти диә.
Ризам будыр ки куйҙыл,
Хаҡның фарманын тоҡкол,
Миңә рәхим ҡылмағыл,
Булма *гаси***, ти диә.
Өч сүзем бар, әй бабам,
Ҡолаҡ тотоң, әйтәйен:
Әгәр ҡабул ҡылсаңыз,
Мин әйтәйен, ти диә.
Хәлил әйтер әй, *фәрзәнә****,
Ғәзиз яным *сикербәнә**[4],
Һәр нә кем сән әйтерсән,
Ҡабул ҡылайын, ти диә.
Әүәл сүзем тотоңыз,
*Әл**[5]-аяғым балағыз,
Әль-аяғым буш ҡуймаң,
Ян *чөчөктөр**[6] ти диә.
Ян ачығыдин белмәйен,
Әл-аяғым тибрәнгәй,
Сезгә ҡаным чәчрәгәй,
Гаси булмаң, ти диә.
Гасилар эше *дөшуар**[7],
Анда күрмәгәй *дидар**[8],
Ҡиәмәт көн ҡыйын күргәй,
Ата сүзен тотмаган,
Төлу ғазаптар күргәй
Сүз сезнекедер, ти диә.

---

* *Нәдер* — ничектер; ***гаси* — гонаһлы; *** *фәрзәнә — аҡыллы;* *[4] *сикербәнә* — ҡыҙған; *[5] *әл* — ҡулым; *[6] *чөчөктөр* — ҡәҙерле; *[7] *дөшуар* — ауыр, ҡурҡыныслы; *[8] *дидар* — осрашыу, табышыу.

Икенче сүзем алың,
Йөзөмне ергә ҡуйың,
Миңә рәхим ҡылмаңыз
Булмаң гаси, ти диә.

Өчөнчө, ҡорбан ҡылғыл,
Ҡаплыйғы тунымны алғыл,
Илтеп анамға биргел,
Булсын *ядкәр**, ти диә.

Бу серне ул белмәде,
Мине туя күрмәде,
Моңон, зарын әйтмәде,
Хәсрәт беләән ҡалды я.

Еп-бычаҡны күрғәй,
Анам күңеле түзмәгәй,
Ҡанлығы тунымны күргәй
Әрәм ҡылғай, ти диә.

Ҡачан өйгә барсаңыз,
Өйгә йалғыз керсәңез,
Моңлоғо анам күрсәңез,
Сәләм әйтең, ти диә.

Ана булғысы *гурьян***,
Фәрзәнд хаҡында бер ян,
Ничек түзгәй бу даргә
Моңлоғо анам, ти диә.

*Бутагындан**** айырылғай,
Таза Шахи күрғәй,
Ҡаңны йәшләрен ағызғай
Моңлоғо анам, ти диә.

Морадыға етмәйен,
Ниҙарымға туймайын,
Моңон-зарын әйтмәйен,
Хәчрәт эчрә ҡалды я.

Анам мине юҡлағай,
Күзе-яшен ағызғай,
Фида ҡылдым синә ян,
Ҡабул ҡылғыл, ти диә.

---

* Ядкәр — иҫтәлек; ** *гурьян* — ҡайғырыусан; *** *бутагындан* — дөйә балаһынан.

Мине мескен садыкмын,
Тәнем берлән гашыкмын,
Хак хөкемөнә лайыкмын,
Утырыр улай, ти диә.

Әл-аягым бағланыз,
Миндәй күнел өзөнез,
Хак бойрогон кылыныз,
Тиз булыныз, ти диә.

Барча зарыны әйтте,
Йөзөне ергә куйды,
Иллек-аяк төзәтеп,
*Тәслим** булып яттия.

Мескен Ибраһим купты,
Бычак буғазына куйды,
Бычак йөзи үтмәде,
*Әнрәй*** булып тор диә.

Исмәгил башын күтәрде,
Бу ни сәбәбтер диде,
Очо берлән чәченез,
Булмагыл гаси, ти диә.

Бычак йөзе үтмәде,
Боғазыны һич кисмәде,
Һәр чында кылды, үтмәде,
Хәлил *кәһәри* *** кил диә.

Хәлилнең кәһәре килде,
Бычакны ташка орды,
Бычак боғазынча батты,
Таш тетрәп тор диә.

Әйтер, ташны кисәсен,
Исмәгилне кисмисен,
Минем сүзем тотмисын,
Бу нә сердер, ти диә.

Хакнын фарманы булды,
Ул бычак телгә килде,
*Фәсих**** телене сүзләде,
Бу нә кәһәр, ти диә.

---

* Тәслим — риза; ** *әнрәй* — аптырап тора; *** *кәһәри* — асыуы; **** *фәсих* — якшы, килешле.

Син әйтерсең: кискел дип,
Яппар әйтер: кисмәң дип,
Ничек аны кисәйен,
Ғазап ҡылыр, ти диә.

Ғәрше-ҡөршө иңрәди*,
*Ләүхе*** ҡәләм тетрәде,
Ер-көн барча тетрәйер,
Зар вә *фәғән**** ҡыл диә.

Сансыз *мәләк**4 инде,
Йөз хәзрәткә китерде,
Исмәғилне теләйен,
Раббың риза итәйен.

Ул Ябраил йүнәлде.
Хаҡ сәләмен еткерде,
*Күрекле ҡусҡар**5 индерде,
Ҡорбан ашы ҡыл диә.

Башы ҡара күп ҡусҡар,
*Фирдәүес**6 утын утлар,
Һыуҙы *кәүсәрне**7 сулап,
Анда йулан ҡыл диә.

Хаҡ фарманын ти керде,
Ҡорбаның ҡабул ҡылды,
Исмәғилнең башыға
Дәр вә яуһәр сәстия.

Бу ҡусҡарның йөнөндән
Абдал алды минулға.
Бу ҡусҡарның тиресе
*Сәфәр**8 айында бүл диә.

Ошбу ҡусҡарны алғыл,
Исмәғил илкени язғыл,
Хәзрәтеңә шөкөр ҡылғыл,
Күрекле *һәҙия**9, ти диә.

Исмәғилнең асылынан
Бер ир ҡубар нәселендин,

---

* *Ғәрше-ҡөршө* — күктәр-ерҙәр; ** *Ләүхе* — фәрештә-яҙыусы; *** *фәғән* — ҡайғы; *4 *мәләк* — фәрештә; *5 *күрекле ҡусҡар* — һимеҙ-матур ҡуй-һарыҡ; *6 *Фирдәүес* — йәннәт баҡсаһы; *7 *кәүсәрне* — йылғаны; *8 *сәфәр* — яҡшы ай; *9 *һәҙия* — бүләк.

Ғәләм тулғай нурындин
Хаҡ Мөхәмәт ир диә.
Аты анын Мөхәмәт
Булғай өммәткә рәхәт.
Тәшриф ҡылды хаҡ йәннәт
*Дидар** вәғдә ҡыл диә.
Ғашиҡларнын дәртигә
Табыр дауа теләсә.
Ҡолда теләп булмаса,
Ҡачан табыр, ти диә.
Ғашиҡларны сынай йөр,
Дәртигә дауа бирер,
*Ҡол Сөләймән әйтү бән***,
Дусыңа ядкәр ҡыл диә.

Амин.

Тәржемәне ғәрәп шрифенән һәм теленән әнейем Илбулдина Сафия Муллағәли ҡыҙы яһаны. Тексты яҙҙы һәм формалаштырҙы Илбулдин Фәтхелислам улы Фәсхетдин.

Ейәнсура, октябрь, 1980 й. Ырымбур өлкәһе.

---

* *Дидар* — Аллаһы тәғәләнен йөҙө-нуры; ** *Ҡол Сөләймән әйтү бән* — Сөләймән фәрештә аша Аллаға риза булыу.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Төҙөүсенән (Хөсәйенова Г.Р.) 3

Инеш (Шоңҡаров Н.Д.) 7

I. Балалар уйындары

Ҡыҙҙар менән малайҙар бергә уйнай торған уйындар 11

Малайҙар уйындары 19

Ҡыҙҙар уйындары 26

II. Йәштәр уйындары

Ҡыҙҙар менән егеттәр бергә уйнаған уйындар 28

Егеттәр уйындары 33

Ҡыҙҙар уйындары 33

III.Ир-егеттәрҙең уйындары 35

IV. Ҡатын-ҡыҙҙар менән балалар уйындары 39

V. Ололарҙың уйындары

Бабайҙар уйындары 42

Әбейҙәр уйыны 43

Иҫкәрмәләр 44

Ҡушымта 55

Научное издание

БАШКИРСКИЕ НАРОДНЫЕ ИГРЫ

Редактор: *Ф.С. Тикеев*
Корректор: *А.Д. Салихова*
Компьютерная верстка *А.Л. Гаделовой*

Подписано в печать 15.03.06
Формат $60x84^{1}/_{16}$. Бумага офсетная.
Гарнитура «Таймс». Печать на ризографе.
Усл.печ.л. 4,41. Уч.-изд.л. 4,24.
Тираж 200 экз. Заказ № 38

Издательство «Гилем».
450077, г. Уфа, ул. Кирова, 15
Тел.: 73-05-93, 72-36-82

Отпечатано на оборудовании
издательства «Гилем»
450077, г. Уфа, ул. Кирова, 15
Тел.: 73-05-93, 72-36-82